

**_Клара ӘСФӘНДИӘРОВА,_**
**_тарих фәндәре кандидаты_**

# Башҡортостан яу йылдарында

## (тарихи хроника)

*Бөйөк Ватан һуғышының был ҡыҫҡа ғына йылъяҙмаһы республика матбуғат баҫмаларының 1941 йылдың 22 июненән 1945 йылдың 9 майына тиклемге һандары буйынса төҙөлдө, шулай уҡ Өфө, Мәскәү архивтары материалдары ҡулланылды. Хәбәрҙәр шул көндәрҙәге «Совинформбюро» сводкалары кеүек ҡыҫҡа, аныҡ йөкмәткеле һәм улар бер генә маҡсатҡа йүнәлтелгән: «Бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә Еңеү өсөн!» Һәм был көндәрҙең һәр береһе, Башҡортостанда етештерелгән һәр тонна иген, яғыулыҡ, һәр бер снаряд Бөйөк Еңеү көнөн яҡынайта. Ҙур, ауыр юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, республика һуғыштан Советтар Союзының һәр яҡтан үҫешкән, иң көслө төбәктәренең береһе булып нығынып сыға, сәнәғәт, фән, мәҙәниәт ифрат көслө үҫеш ала. Ул көндәрҙе иҫкә алыу киләсәк быуындарҙы илебеҙгә, халҡыбыҙға ышанысты арттыра, киләсәгебеҙгә өмөт менән ҡарарға ярҙам итә.*

### 1941 йыл

**22 июнь.** Ҡиске сәғәт 8-ҙә Өфөлә «Ударник» клубы янындағы майҙанда 10 меңдән ашыу кеше митингыға йыйылды һәм партия Өлкә Комитетының беренсе секретары Г.П.Дорофеевтың фашистик Германияның СССР-ға һуғыш башлауы тураһында белдереүен тыңланы.

Бындай митингылар Белорет, Ишембай ҡалаларында һәм республиканың башҡа күп кенә райондарында булып үтте. Митингыла Ишембай нефтселәре ошондай белдереү яһаны: «Беҙ нефттең һуғышта ниндәй әһәмиәт тотҡанын яҡшы беләбеҙ. Беҙ фронттан алыҫ булһаҡ та, хәрәкәттәге армия булып һаналабыҙ һәм шуға күрә илебеҙгә күпме нефть кәрәк булһа, шул тиклем бирәсәкбеҙ. Бөтә көсөбөҙ — планды арттырып үтәүгә биреләсәк! Беҙҙең сығарған һәр тонна нефть — Гитлер өсөн залп!»

**23 июнь.** Өфөнөң 3-сө һанлы төҙөлөш тресында дөйөм партия йыйылышы булып үтте. Ошо уҡ көндө цехтарҙа митингылар ойошторолоп, унда 85 кеше сығыш яһаны.

Өс көн эсендә цехтарҙа — 5 партия, 14 — эшселәр, хеҙмәткәрҙәр йыйылыштары булып үтте. Унда бөтәһе 1200 кеше ҡатнашты. Заводта 380 кешене йәлеп иткән 61 әңгәмә үткәрелде. Политик яҡтан активлыҡ күтәрелеү хеҙмәт нормаларын үтәүгә лә ҙур булышлыҡ итте. Ошо көндәрҙә Өфө паровоздар ремонтлау заводы слесарҙары — стахановсылар Гущин, Писарев, Ракитин, Фомин көндәлек эш нормаларын 200—250 процентҡа үтәне.

**2 июль.** ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты ҡала һәм район комитеттарына хат менән мөрәжәғәт итеп, унда партия-ойоштороу, масса-политик һәм хужалыҡ эштәрен һуғыш мәнфәғәттәренә яраҡлаштырып ҡорорға кон-

крет күрһәтмәләр бирҙе. Беренсенән, ниндәй генә ҡыйынлыҡтар булыуына ҡарамаҫтан, промышленность предприятиелары, совхоздар, колхоздар һәм башҡа ойошмалар, һис һүҙһеҙ, производство пландарын үтәргә тейештәр. Икенсенән, партия, совет активистарын йәлеп итеү юлы менән халыҡ араһында агитация эшен көсәйтергә. Республикала бер генә кеше лә илдәге һәм донъялағы хәл-ваҡиғаларҙы белмәй ҡалырға тейеш түгел. Өсөнсөнән, Ҡыҙыл Армияны запас һәм кәрәкле инвентарҙар менән тәьмин итеүҙе юғары сифатта үткәрергә. Дүртенсенән, бер ниндәй ҙә провокацияға бирелмәҫкә. Бишенсенән, социалистик милекте ныҡ һаҡларға һәм был эштә һүлпәнлек күрһәтеүселәргә тейешле яза ҡулланырға. Алтынсынан, халыҡ араһында Осоавиахим ойошмаһы аша хәрби әҙерлекте көсәйтергә.

**3 июль.** Өфө районы колхозсы ҡатын-кыҙҙары тракторсы һәм комбайнсы һөнәрен үҙләштереү өсөн бөтә Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙарына мөрәжәғәт менән сығыш яһаны. Улар үҙҙәре (42 кеше) МТС эргәһендә ойошторолған тракторсылар һәм комбайнсылар курсында уҡый башланы.

Башҡорт дәүләт педагогия институты «1756—1763 йылдарҙағы Ете йыллыҡ һуғыш» темаһына арналған киң күләмле әҙәбиәт һәм картиналар күргәҙмәһе ойошторҙо. Күргәҙмәлә академик Е.Тарленың «1812 йылда Наполеондың Россияға һөжүме», В.Соловьевтың «Кутузов», рәссам А.Кившенконың «Филиҙағы хәрби совет» картиналарының күсермәһе, А.Пастернак әҫәрҙәре, Т.Ковалевскийҙың «Рус әтәсе һәм француз бүреһе» тигән карикатураһы, художник И.Теребеневаның картиналары бар. Ошо уҡ институтта студенттар һәм хеҙмәткәрҙәр өсөн медицина сестралары әҙерләү мәктәбе асылды. Уның менән ғилми хеҙмәткәр физиолог Т.Ломаков етәкселек итә.

**5 июль.** Башҡортостан ауыл хужалығы институты студенттары һәм уҡытыусылары республиканың колхоз һәм совхоздарына эшкә китте. 77 кеше комбайнсы һәм уларҙың ярҙамсылары булып эшләйәсәк. (Күп кенә студенттар Стәрлетамаҡ һәм Дәүләкән ҡалаларындағы механизаторҙар әҙерләүсе ҡыҫҡа сроклы курстар тамамланы).

Резерв идаралығы, күп кенә йәштәрҙең ФЗО мәктәптәрендә уҡыуға ынтылыштарын иҫәпкә алып, йәшәп килгән һөнәрселек училищелары ҡаршыһында ФЗО мәктәптәренең яңы филиалдарын асыу тураһында ҡарар иғлан итте. Өфөнөң 3-сө һанлы резерв идаралығы ҡаршыһында 800 кешелек, 2-се һанлы Ишембай идаралығында 200 кешелек мәктәптәр асылды. Ә йәшәп килгән 2-се, 3-сө һанлы ФЗО мәктәптәренә өҫтәмә рәүештә 450 кеше ҡабул ителеп, бөтәһе 2150 кеше һөнәр үҙләштерәсәк.

**6 июль.** Өфө нефть эшкәртеү заводының күп кенә эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре, инженер-техник работниктары фронтҡа киткән иптәштәре урынына икенсе вахтаға баҫты һәм цехтарҙың, участкаларҙың өҙлөкһөҙ эшләүен тәьмин итте. Мәҫәлән, мастер Конюхов 2 радиаторҙы 7 көн эшләү урынына 3 көндә, ә мастер Бородин 12 көн эшләй торған эште 7 көндә эшләп бирҙе. Төп эштән айырылмайынса, заводтың 178 эшсеһе икенсе һөнәр үҙләштерә башланы.

**9 июль.** Башҡортостан китап нәшриәте 20000 дана рус телендә, 10000 дана башҡорт телендә Дәүләт Оборона Комитеты Председателе И.В.Сталиндың 3 июлдә һөйләгән телмәрен баҫып сығарҙы.

Туймазы районы хеҙмәтсәндәре Ҡыҙыл Армияны аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү буйынса ярыш йәйелдереп, ит тапшырыуҙың беренсе квартал планын 400 процентҡа үтәне. Районның 2 мең колхозсыһы ла ит тапшырыу буйынса планды ваҡытынан алда үтәне.

**10 июль.** Бәләбәй педагогия училищеһы коллективы һауа һәм химия һөжүменә ҡаршы көрәш юлдарын халыҡҡа аңлатыу эше алып барыу өсөн группалар төҙөнө.

**11 июль.** Республиканың күп кенә мәктәп уҡыусылары, юғары уҡыу йорттары студенттары ауыл хужалығы эшсәндәренә ярҙам итеү өсөн төрлө райондарға китте. Уларҙың һаны 2 меңдән ашып китә. Ә Башҡорт дәүләт педагогия институтының 125 студенты Өфө паровоздар ремонтлау заводында, 200-ҙән ашыуы башҡа предприятиеларҙа эшкә тотондо. Йоматау ауыл хужалығы техникумынан 60 кеше Шишмә районы колхоздарына ебәрелде.

**12 июль.** Өфө ҡалаһының 2-се һанлы мәктәп уҡыусылары медицина сестралары курстарын тамамланы. Уларҙың күбеһе — комсомол ағзалары. Улар йәйге каникулдарынан баш тартып, үҙ теләктәре менән республика райондарына эшкә китте.

**13 июль.** Башҡорт дәүләт художество музейының ҙур залында «Илбаҫарҙарға ҡаршы көрәштә СССР халыҡтарының батырлығы» тигән темаға күргәҙмә асылып, ул хеҙмәтсәндәрҙе ирек һөйөүсе СССР халыҡтарының быуаттар буйына сит дошмандарға ҡаршы ғәҙел көрәшенең әһәмиәтле моменттары менән таныштырҙы.

**20 июль.** Дәүләт Оборона Комитеты Белорет заводтарына тиҙ көндәрҙә юғары сифатлы ҡорос етештереү бурысын ҡуйҙы, һәм был бурыс бер нисә айҙан тормошҡа ла ашырылды. Заводта ҡорос сым етештереү икеләтә артты. Завод илдә оборона промышленносын юғары сифатлы ҡорос сым менән тәьмин итеүсе берҙән-бер завод булды.

**4 август.** Белорет ҡалаһының предприятиеларында, учреждениеларында, һайлау участкаларында 500 агитатор партияның һәм хөкүмәттең ҡарарҙарын, күрһәтмәләрен аңлатыу эшен башлап ебәрҙе.

Партияның ҡала комитеты лекторҙары «1812 йылғы Ватан һуғышы», «Минин һәм Пожарский етәкселегендәге халыҡ ополчениеһының Польша илбаҫарҙарын тар-мар итеүе» һ.б. тарихи темаларға лекциялар уҡыны. Уларҙы 6 меңдән ашыу кеше тыңланы. Бындай лекциялар ҙур патриотик күтәрелеш тыуҙырҙы. Шул көндәрҙә ҡала хәрби комиссариатына фронтҡа ебәреүҙе һорап 1500 ғариза бирелде һәм 5 меңдән ашыу кеше халыҡ ополчениеһы отрядына яҙылды.

**9 август.** Дүртөйлө районы колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары фронтҡа киткән ирҙәре урынында эшләү өсөн уларҙың профессияларын өйрәнеүҙе ойошторҙо. Улар бригадалар менән етәкселек итте, бесән сабыу звенолары ойошторҙо. «Әсән» колхозында 55 йәшлек Латыпова, Нәбиева, Фатыхова бесән сабыу йөкләмәләрен 150 процентҡа үтәйҙәр.

Тракторсы ҡатын-ҡыҙҙар ҙа тырыш хеҙмәт өлгөһө күрһәтә. Мәҫәлән, Ғимаева смена нормаһын 233 процентҡа үтәһә, Фазлетдинова нормаһын 150 процентҡа үтәп, 26 килограмм яғыулыҡ экономияланы.

Башҡортостандың бөтә райондарында ла илдең оборона фондына аҡса индереү киң ҡолас ала. Белорет районы буйынса 30 мең 773 һум, Бөрө районы — 30 мең һум, Ҡариҙел районы — 34 мең һум, Балтас районы — 26 мең, Иглин районы — 23 мең, Мәләүез районы — 23 мең, Миәкә районы — 3 мең, Баймаҡ районы буйынса — 85 мең һум аҡса йыйылды. Колхозсылар аҡсанан тыш бик күп аҙыҡ-түлек һәм үҙҙәренең эш көндәрен дә индерҙе. Бынан тыш, аҡсалата-әйберләтә лотерея билеттары һатыу ойошторолдо.

**10 август.** Өфө паровоздар ремонтлау заводы, паровоз һәм вагондар депоһы эшселәре ял көнө эшләп, оборона фондына 18,3 мең һум аҡса индерҙе.

Башҡорт дәүләт педагогия институты һәм Украина ССР-ы Фәндәр академияһы коллективтары ике көнлөк эш хаҡын оборона фондына иҫәпләне. Ул фонд фәндәр академияһы буйынса ғына ла 12356 һум тәшкил итте. Өфө ҡалаһының 153 ойошмаһынан, учреждениеһынан был көндө 378778 һум аҡса ҡаланың Үҙәк һаҡлыҡ кассаһына тапшырылды.

**15 август.** Башҡортостанда нефть эҙләү эшен көсәйтеү маҡсатында СССР Фәндәр академияһы тарафынан махсус ойошторолған экспедиция Өфөгә килә. Уның составында беренсе башҡорт нефтен асыусы академик А.А.Блохин һәм тағы ла 100 фәнни һәм инженер-техник хеҙмәткәр бар. Шул уҡ ваҡытта Дәүләт Оборона Комитеты ҡарары менән Стәрлетамаҡ ҡалаһына нефть эҙләүсе Әзербайжан тресы күсерелә. Майкоп һәм Грозныйҙан нефть промышленносының ҡоролмалары килтерелә. Былар бөтәһе республикала нефть промышленносының техник базаһын нығытыуға булышлыҡ итте һәм 1941 йылдың икенсе яртыһында нефть сығарыуҙың кәмеүен туҡтатырға мөмкинлек бирҙе.

**20 август.** Республикала промышленносты һуғыш мәнфәғәтенә яраҡлаштырып ҡороу күсереп килтерелгән предприятиелар һәм ҡоролмаларҙы урынлаштырыу һәм эшкә ебәреү менән берлектә алып барылды. Ошо айҙа илдең көнбайыш районларынан Башҡортостанға 172 промышленность предприятиеһы, айырым цехтар һәм установкалар килтерелде.

Быларҙан тыш, нефть промышленносы, элемтә, СССР-ҙың Дәүләт контроле наркоматтары, РСФСР-ҙың ҡайһы бер наркоматтары, Ҡыҙыл Армияның Генеральный Штаб академияһы, В.И.Ленин исемендәге Хәрби-политик академия, офицерҙар составы әҙерләй торған 13 хәрби уҡыу йорто, 20-гә яҡын фәнни-тикшеренеү институттары менән Украина ССР-ның Фәндәр академияһы, Киевтан Т.Шевченко исемендәге опера һәм балет театры, Мәскәүҙән нефть, медицина, китапхана институттары, С.Орджоникидзе исемендәге Рыбинск авиация институты, Орел педагогия институты һ.б. уҡыу йорттары һәм ойошмалары күсереп килтерелде.

Партияның Өфө ҡала комитеты саҡырыуы буйынса ошо ваҡыт эсендә меңәрләгән эшсе, хеҙмәткәр, студент бер туҡтауһыҙ килеп торған завод, фабрикаларҙың ҡоролмаларын бушатырға һәм урынлаштырырға сыҡты. Бер нисә көн эсендә яңы цехтарҙы төҙөү, урынлаштырыу өсөн 24 мең кеше эшкә ебәрелде.

**24 август.** Мәскәү Үҙәк ҡурсаҡ театры Луначарский исемендәге йәйге театр сәхнәһендә үҙенең гастролдәрен башланы.

**26 август.** Башҡортостан крайҙы өйрәнеү музейында «СССР халыҡтары Ватан һуғышында» тигән темаға ҙур күргәҙмә асылды. Рус рәссамдарының иң яҡшы картиналары менән бер рәттән, В.И.Мякимовтың башҡорт атлы отрядының 1814 йылда Париж ҡалаһына инеүен һүрәтләгән әҫәре лә бар.

Луначарский исемендәге йәйге театрҙа РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы С.В.Образцовтың ижади кисәһе булып үтте.

**28 август.** Башҡортостандың хеҙмәтсәндәре ҙур патриотик рухта мәскәүҙәрҙең һәм ленинградтарҙың оборона өсөн айырым халыҡ фонды төҙөү тураһындағы саҡырыуын күтәреп алды. Бөтә ерҙәрҙә лә митингылар үткәрелде, һәр бер кеше һуғыш бөткәнгә тиклем ай һайын өс көнлөк эш хаҡын индереп барырға ҡарар итте, күптәр алтын, көмөш әйберҙәрен, дәүләт заемдарын митинг ваҡытында уҡ тапшырҙы. Мәҫәлән, Бөрө ҡалаһында пенсионерка Малофеева алтын балдағын һәм 500 һумлыҡ заем облигацияһын, Бөрө педучилищеһы уҡытыусылары — 7120 һумлыҡ, 1-се һанлы мәктәптең уҡытыусылары — 8 мең һумлыҡ заем облигацияһы, район һаулыҡ һаҡлау бүлегенең 4 хеҙмәткәре 3870 һум аҡса тапшырҙы.

Һуңғы бер нисә көн эсендә генә лә Белорет һәм Тирлән эшселәренән ярты миллион һум аҡса оборона фондына тапшырылды.

**30 август.** Башҡорт дәүләт театры бинаһында бик күп халыҡты йәлеп иткән «Ватан һуғышына 2 ай» тигән темаға лекция уҡылды.

**2 сентябрь.** Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры артистары Т.Шевченко исемендәге Киев дәүләт опера һәм балет театры артистары менән бергә «Травиатаны» күрһәтте.

**6 сентябрь.** Башҡорт академия опера театры бинаһында И.Юрьеваның гастролдәре башланды. Программала — сиған халҡы йырҙары.

Башҡортостан республика радиокомитеты үҙенең эшен һуғыштың тәүге көндәренән үк һуғышта еңеп сығыуға өндәгән материалдар тапшырыуға йүнәлтте.

**7 сентябрь.** Республикала XXVII Халыҡ-ара йәштәр көнө үткәрелде. Митингынан һуң ВЛКСМ Үҙәк Комитеты ҡарары буйынса, хәрби фонд иҫәбенә «Тылды нығытайыҡ, хәрби фондты арттырайыҡ» тигән девиз аҫтында өмә ойошторолдо. Унда республиканың меңәрләгән комсомолец-йәштәре ҡатнашты, ә Өфө ҡалаһында ғына уларҙың һаны 57414-кә етте. Белорет ҡалаһынан 400-ҙән ашыу һөнәрселек училищеһы уҡыусылары ҡала яны совхоздарында уңыш йыйыуға сыҡты. Тик бер Баймаҡ районы хеҙмәтсәндәре генә лә оборона фонды иҫәбенә бер көн эсендә 2000 һум аҡса индерҙе.

**9 сентябрь.** Өфө дәүләт циркында республиканың халыҡ артисы, орденлы Борис Эдерзен өйрәтелгән аҡ айыуҙар менән гастролдәрен башланы.

**10 сентябрь.** Өфө ҡала һәм район партия комитеттары агитация һәм пропаганда эшен тамырынан үҙгәртеп ҡорҙо. Был эштә төп иғтибар политик эштең бөтә төр һәм формаларын ҡулланыу, политик үткерлек һәм агитацияның халыҡҡа тәьҫир көсөн арттырыуға бирелде, һуғышҡа киткән 25 лектор урынына яңылары тупланды. Июль-август айҙарында ғына ла был төркөм 30 мең кешене йәлеп иткән 122 лекция уҡыны. Был инде уртаса лекция тыңлаусылар һаны һуғышҡа тиклем дәүергә ҡарағанда ике тапҡырға артыҡ тигән һүҙ.

Һәр район комитеты ҡаршыһында 12—20 кешенән торған агитатор төркөмдәре төҙөлдө. Улар, ҡайҙа халыҡ, шунда сығыш яһай.

Ҡала агитпункты эргәһендә Башҡорт академия һәм опера театры, Башҡорт дәүләт филармонияһы артистарынан группалар ойошторолдо. Уларға ҡаланың художество үҙешмәкәр коллективтары ла ҡушылды. Бөтәһе ошондай 14 культура-агитация бригадалары төҙөлөп, улар июль айында ғына ла 127 тапҡыр сығыш яһаны. Агитация эшендә яңы метод барлыҡҡа килде — лекция, доклад һәм концерт биреү бергә алып барыла.

Бындай бригадалар Пионерҙар йортонда һәм Медиктар клубында ла ойошторолоп, госпиталдәрҙәге яралы һалдаттар араһында ҙур ихтирам яуланы.

**12 сентябрь.** Эвакуацияланған витамин заводын бер ай эсендә эшкә ебәреп, яҡын арала 580 тонна гөлйемеш орлоғо менән тәьмин итеү бурысы ҡуйылды.

Өфөлә, фашизмға ҡаршы ҡатын-ҡыҙҙар митингыһында, барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙы һуғышта еңеп сығыу өсөн бөтә көстө һалып эшләргә саҡырып, Өфө тимер юлы машинисы Г.В.Белобородова сығыш яһаны. Ул август айында ғына 470 килограмм яғыулыҡ экономиялап, уртаса техник тиҙлекте 36 километрҙан 38-гә еткереүе тураһында белдерҙе. Слесарҙар Глухова, Саламатова, Малышева көндәлек норманы 250— 300 процентҡа үтәй.

Республикала Сталин премияһы лауреаты, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы, орденлы Любовь Орлованың гастролдәре башланды. Ошо уҡ көндө Рус дәүләт драма театры үҙенең ҡышҡы сезонын К.Треневтың «Любовь Яровая» спектакле менән асып ебәрҙе. Был театр коллективын эвакуацияланған Украина ССР-ы артистары А.Е.Сноп, М.П.Стрелкова, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы М.П.Смелковтар тулыландырҙы. Репертуарға СССР халыҡтары батырлыҡтарын һүрәтләгән, фашизмды фашлаған әҫәрҙәр индерелде. А.Корнейчуктың «Украина далаларында» комедияһы, Соловьевтың «Фельдмаршал Кутузов» һәм Б.Бикбайҙың «Салауат» пьесалары күрһәтелә.

**15 сентябрь.** Республикала Ҡыҙыл Армия өсөн йылы кейемдәр йыйыуҙы халыҡ үҙ ирке менән ойоштороп ебәрҙе, был инициативаны хуплап, партия Өлкә Комитетының беренсе секретары етәкселегендә республика комиссияһы

төҙөлдө. Был политик әһәмиәткә эйә булған дәүләт ҡарамағындағы ҙур эш тип иғлан ителде.

Рус дәүләт драма театры бинаһында Украина шағир-революционеры Иван Франконың үлеүенә 25 йыл тулыуға ҡарата тантаналы кисә уҙғарылды. Ҡисәлә Украинаның күренекле яҙыусылары һәм шағирҙары ҡатнашты.

**16 сентябрь.** Ҡыҙыл Армияның яралы һалдаттарын хеҙмәтләндереү өсөн партия Өлкә Комитеты ярҙам комитеты ойошторҙо. Был комитет һаулыҡ һаҡлау органдарының эше менән етәкселек итә. Башҡортостанда 32 госпиталь эшләй башланы.

**17 сентябрь.** Хәрби һөнәрҙәргә өйрәтеү өсөн республикала курстар, түңәрәктәр ойошторолдо, аэроклуб эшләне. Ошо көндәрҙә генә был аэроклуб 968 летчикты фронтҡа оҙатты. Уларҙың араһында — 20 ҡатын-ҡыҙ. Улар Советтар Союзы Геройы Марина Раскова етәкселек иткән авиаполкта хеҙмәт итәсәк.

Коммунистар партияһының «Бөтә көстө дошманды тар-мар итеүгә» тигән саҡырыуы республика уҡытыусылары һәм уҡыусылары араһында патриотик күтәрелеш тапты. Меңәрләгән уҡытыусылар һәм уҡыусылар колхоздарҙа һәм совхоздарҙа уңыш йыйыуҙа ҡатнашты. Мәсәлән, Бәләбәй районы колхоздары баҫыуҙарында 10 мең уҡыусы һәм 358 уҡытыусы эшләне. Уҡытыусы Макарова көнөнә 700 көлтә бәйләне. Туймазы районында 7 мең, Илеш районында 5 мең уҡыусы уңыш йыйыуҙа ҡатнашты. Өфөнөң Киров районы уҡыусыларынан 1300 кеше Бүздәк, Бишбүләк, Әлшәй райондарында эшләне. Өфөнөң 3-сө һанлы мәктәбенең 18 кешенән торған бригадаһы Бүздәк совхозында 310 гектар бойҙай утаны, 60 гектар ерҙең бесәнен эҫкертләне. Был дәүерҙә балаларҙың йәмғиәткә файҙалы эштәре мәктәптәрҙең уҡытыу-тәрбиә эшендә иң мөһим урында торҙо.

**18 сентябрь.** Өфө ҡалаһында Коминтерндың башҡарма комитеты үҙенең эшен башлап ебәрҙе. Унда халыҡ-ара коммунистик хәрәкәттең күренекле вәкилдәре Г.Димитров, В.Пик, М.Торез, К.Готвальд, П.Тольятти, Д.Ибаррури, О.Куусинен һәм башҡалар бар.

Башҡорт филармонияһы артистары 58 шефлыҡ концерты биреп, унан йыйылған аҡсаның бер өлөшөн оборона фондына тапшырҙы. Шефлыҡ концертынан тыш, артистар ике ай эсендә 330 концерт бирҙе һәм бынан 207 мең һум доход алды, ә һуғышҡа тиклем улар ярты йылда ошо тиклем сығыш яһайҙар ине.

Өфө ҡалаһының партия кабинеты агитпунктҡа әйләндерелде. Район агитпункттарына һәм агитколлективтарына ярҙам итеү маҡсатында ул доклад, һөйләшеүҙәр өсөн тематика эшкәртте. Бында санитар, хәрби һорауҙарға консультациялар үткәрелә. Агитпункт залында Бөйөк Ватан һуғышына арналған фотокүргәҙмә ойошторолған.

**21 сентябрь.** Башҡортостан дәүләт филармонияһында Бөтә Союз конкурсы лауреаты Ленинград оперетта театры үҙенең гастролдәрен башлап ебәрҙе.

**22 сентябрь.** Өфө сит телдәр институты Башҡорт дәүләт педагогия институтының сит телдәр факультетына әйләнде.

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында яңы башҡорт операһы — композитор Н.Чемберджи тарафынан яҙылған «Ҡарлуғас» сәхнәгә ҡуйылды.

**2 октябрь.** Украина ССР-ы Фәндәр академияһының сираттағы ултырышы булды. Унда Башҡортостан фәнни-тикшеренеү ялан станцияһының шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүҙәге яңы ысулдары өҫтөндә эшләүенең һөҙөмтәләре ҡаралды.

Башҡортостан китап нәшриәте башҡорт телендә «Тыуған ил өсөн» тигән исем аҫтында фашизмға ҡаршы шиғырҙар һәм йырҙар йыйынтығы баҫып сығарҙы. Унда шағирҙар — М.Ғафури, Б.Бикбай, С.Ҡудаш, Р.Ниғмәти, Ғ.Ғүмәр, С.Ҡулибай, М.Хәй һәм сәсәндәр Ф.Дәүләтшин, С.Исмәғилевтәрҙең, украин яҙыусылары П.Тычина, М.Рыльскийҙың әҫәрҙәре бар. Авторҙар йыйынтыҡ гонорарын оборона фондына индерҙе.

Бынан тыш, нәшриәт «СССР ҡатын-ҡыҙҙарының Бөтә донъя ҡатын-ҡыҙҙарына мөрәжәғәтен» башҡорт һәм рус телдәрендә баҫып сығарҙы.

Өфө йәштәре фашизмды фашлаусы митингыға йыйылды. Уны комсомолдың ҡала комитеты секретары Е.Тадеко асты. Йәштәр алдында яҙыусы Баязит Бикбай шиғыр формаһында төҙөлгән ялҡынлы телмәр менән сығыш яһаны.

Митингыла Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған артисы, БАССР Верховный Советы депутаты Арыҫлан Мөбәрәков сығыш яһаны, Украин яҙыусыһы Натан Рыбак, хәрби врачтар, медицина сестралары, студенттар сығып һөйләне. Митингыла ҡатнашыусылар бер тауыштан Ленинград һәм Одесса ҡалаларын һаҡлаусыларға ҡотлау хаты ҡабул итте.

**9 октябрь.** Дәүләкән һәм Яңауыл райондары үҙәктәрендә фашизмға ҡаршы ҡатын-ҡыҙҙар митингылары ойошторолдо.

**10 октябрь.** ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитетының VII Пленумы булып үтте. Унда хәрби уҡыуҙарҙың торошо ҡаралды. Пленум политик эште киңәйтеүҙе, всевобуч эшендә коммунистар һәм комсомолецтар өлгө булып торорға тейешлеген билдәләне.

**13 октябрь.** Рус драма театры бинаһында Мәскәү эстрадаһының концерты ҡуйылды.

Өфөлә Союздың балалар фильмы студияһы яҙыусы С.Михалков сценарийы буйынса эшләнгән хәрби темаға «Сокол өҫтөндә һуғыш» тигән кинофильм төшөрөүҙе бөтөрҙө.

**22 октябрь.** Башҡорт дәүләт медицина институты сотрудниктары фронт өсөн йылы кейемдәр (бейма, тун, ойоҡбаш, бейәләй һ.б.) йыйып тапшырҙы. Профессор Савченко ике һалдатты кейендерерлек бүләк тапшырҙы. Институттың ректоры Пандиков һәм профессор Емельянов толоп, тун, бейма, йөн свитер килтерҙе.

**5 ноябрь.** Ҡлин ҡалаһының станоктар төҙөү заводы, Донецк сода заводы, Славянск сода заводы, Серпуховтан ике туҡыу фабрикаһы Белорет, Стәрлетамаҡ, Өфө ҡалаларында урынлаштырылды.

**11 декабрь.** Шишмә районының Ленин исемендәге колхоз хеҙмәтсәндәре республиканың бөтә колхозсыларына дәүләт пландарын ваҡытында үтәргә тигән мөрәжәғәт менән сығыш яһаны. Республикала был саҡырыу ҡабул ителеп, күп кенә колхоздар һәм совхоздар үҙҙәренең пландарын арттырып үтәне һәм илдең оборона фондына өҫтәмә рәүештә 400—500-әр центнер икмәк тапшырҙы.

**15 декабрь.** Башҡортостан медицина институты йортонда Ленин орденлы 1-се Мәскәү медицина институты уҡыуҙар башлап ебәрҙе. Бөтәһе 450 студент уҡый. Был ике институт республикала врачтарҙың квалификацияһын күтәреү маҡсатында курстар асты. Бынан тыш, фәнни конференциялар ҙа буласаҡ. Өфө ҡалаһында һаулыҡ һаҡлау эшен ойоштороуҙың киң күләмле планы төҙөлдө. Был эшкә фәндең атаҡлы эшмәкәрҙәре — профессорҙар Мольков, Семашко, Винокуров һ.б. етәкселек итәсәк.

**16 декабрь.** Дәүләт Оборона Ҡомитетының ҡарары нигеҙендә республикала 16 йәштән 50 йәшкә тиклем булған ирҙәр һәм егеттәр өсөн всевобуч ойошторолдо. 372 уҡыу пунктында 83 мең кеше белем ала.

ВКП(б) Өлкә Ҡомитеты һәм Халыҡ Ҡомиссарҙары Советының «Урындағы милләт халҡынан ике кавалерия дивизияһы төҙөү тураһындағы» ҡарары нигеҙендә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы төҙөлдө. Уның командиры итеп полковник, коммунист М.М.Шайморатов, политработниктары һәм полк командирҙары итеп Т.Т.Кусимов, Г.А.Нафиҡов, Г.Д.Маҡаев, М.З.Назыров, Х.Н.Әхмәтов, Б.С.Сәйетғәлин тәғәйенләнде. Уны фронтҡа оҙатҡанда тантаналы рәүештә БАССР Верховный Советы Президиумының байрағы, ә полктарға — Өфө паровоздар ремонтлау заводының, Белорет металлургия заводының һәм Ишембай нефть промыслаларының байраҡтары тапшырылды.

**18 декабрь.** Партияның Өлкә Комитеты республикаға килгән предприятиеларҙы, учреждениеларҙы урынлаштырыу, уларҙың эшен яйға һалыу өсөн айырым комиссия төҙөнө. Бындай партия, совет комиссиялары Стәрлетамаҡ һәм башҡа ҡалаларҙа ла эшләй. Ошо көндәрҙә ҡала һәм райондарға урынлаштырылған халыҡ һаны 278 мең иҫәпләнә. Өфө моторҙар төҙөү заводында 11 производство корпусынан тыш 127 йорт һәм барак, ике палаткалар ҡаласығы төҙөлөп, унда 6600 кеше урынлаштырылды.

**20 декабрь.** Өфө моторҙар төҙөү заводында производство заданиеларын ваҡытынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш башланды. Ошо айҙа производствола ударник һәм новатор исемен 12476 эшсе яуланы.

## 1942 йыл

**12 ғинуар.** Сәсән Сәйет Исмәғилев республика колхоздарында 500-гә яҡын концерт бирҙе, 20 райондың газетаһында үҙенең шиғырҙарын баҫтырҙы, һуғыш суҡмарҙарын ҡәһәрләп, күп тапҡырҙар радио аша сығыш яһаны.

**25 ғинуар.** Украина ССР-ы Фәндәр академияһының сессияһы тамамланды. Ул Өфөгә 1941 йылдың йәйендә күсеп килгәйне. Ошо ваҡыт эсендә ул үҙенең эш планын һуғыш мәнфәғәтенә яраҡлаштырып төҙөп, илдең оборонаһын нығытыу маҡсатында ҡыҙыу эш башланы. Сессияла фәндең төрлө тармаҡтарына ҡағылышлы 90-дан ашыу доклад тыңланды. Шуныһы әһәмиәтле, ошо сығыштарҙың 30-ға яҡыны Башҡортостандың нефть, химия, медицина һәм ауыл хужалығына арналған. Сөнки Фәндәр академияһы тәбиғи ер аҫты байлыҡтарын эҙләүгә, эшкәртеүгә актив тотонғайны. Бынан тыш, Украина ғалимдары башҡорт халҡының фольклорын өйрәнеүҙе башлап ебәрҙе. Шуға күрә ҡайһы бер докладтар ошо проблемаға ла ҡағылды.

**31 ғинуар.** Башнаркомздрав ҡаршыһында медицина буйынса лекторий асылды. Уның төп маҡсаты —халыҡ араһында санитар оборонаһы буйынса киң аңлатыу эше алып барыу.

**1 февраль.** Ҡыҙыл Армияның 24 йыллығын ҡаршылап, республикала традицион комсомол-профсоюз саңғы кросы башланды. Беренсе көндә 6000 саңғысы стартҡа баҫты.

**4 февраль.** Өфө рус ҡурсаҡ театрының ойошторолоуына 10 йыл тулды. Уның репертуарында А.Чеховтың «Ҡаштанка», А.Толстойҙың «Алтын асҡыс», «Үлек батша тураһында әкиәт», «Салтан батша тураһында әкиәт» һ.б. әҫәрҙәр бар. Театр йәй көндәрендә райондарға гастролдәргә сыға. Ошо 10 йыл эсендә ул 2448 спектакль күрһәтеп, 394460 тамашасыны хеҙмәтләндерҙе.

**8 февраль.** Өфө рус драма театры артистары ҙур концерт биреп, уның аҡсаһын оборона фондына тапшырҙы.

**10 февраль.** Партияның Өлкә Комитеты Пленумы булды. Унда предприятиеларға яңы килгән эшселәргә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә яңы һөнәр өйрәтеүҙе ойоштороҡа тигән ҡарар ҡабул ителде. Эре предприятиеларҙа уҡыу комбинаттары, техминимум түңәрәктәре, курстары һәм мәктәптәре асылды. Өфө нефть эшкәртеү заводының уҡыу комбинаты 800 йәш эшсе (шуларҙың 470-е ҡатын-ҡыҙ) әҙерләне.

**15 февраль.** Т.Г.Шевченко исемендәге Ленин орденлы Киев опера театры «Дунай артындағы запорожец» операһын күрһәтеп, унан йыйылған аҡсаны хәрби фондҡа тапшырҙы.

Украина ССР-ы Фәндәр академияһы ҡаршыһындағы лекторийҙа академик Н.Моргулис «Атомдың электрон ҡатламы һәм уның спектрҙарының хәҙерге хәле тураһында фән» тигән темаға лекция уҡыны.

БАССР Совнаркомының ҙур залында сәнғәт кешеләре менән осрашыу кисәһе ойошторолдо. Унда Украина ССР-ның атҡаҙанған артистары Минаев, Романов, Белоусов, Узладзе һ.б. ҡатнашты.

**16 февраль.** Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡаршыһында ойошторолған культура һәм сәнғәт лекторийы икенсе ай инде эшләп килә. Унда республика яҙыусылары, музыка һәм сәнғәт белгестәре, врачтар һәм композиторҙар тупланған. Тыңлаусылары — эшселәр, интеллигенция, хәрби хеҙмәткәрҙәр, уҡыусылар, йорт хужабикәләре. Лекторий программаһында «Сәнғәттә патриотизм идеяһы», «Совет поэзияһы Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында», «Фашизм — культураның дошманы», «Пушкин», «Глинка» тигән темалар бар. Һәр бер лекция күренекле артистар ҡатнашлығында концерт менән берлектә алып барыла.

**17 февраль.** Өфөгә Украина Фәндәр академияһының 6 миллион томдан торған китапханаһы күсереп килтерелде.

**21 февраль.** Өфөлә һәм республиканың башҡа ҡалаларында музыкант-башҡарыусыларҙың Бөтә Союз һәм Халыҡ-ара конкурстары лауреаты, пианист, орденлы Э.Гилельс һәм Халыҡ-ара конкурстар лауреаты, Мәскәү консерваторияһы профессоры, скрипкасы Д.Ойстрахтың гастролдәре башланды. Был ике сәнғәт оҫтаһының Өфөгә килеүе Башҡортостандың сәнғәт тормошонда ҙур ваҡиға булып тора.

**26 февраль.** Башҡорт дәүләт филармонияһында «Совет артисы» тигән эскадрилья төҙөү өсөн республиканың сәнғәт оҫталары ҡатнашлығында ҙур концерт бирелде.

Өфө художество музейы залында Башҡортостан рәссамдары картиналарынан торған «Тыуған ил өсөн» тигән күргәҙмә асылды. Унда совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы батырлыҡтары менән бер рәттән тылдағы ҡаһарманлыҡтарҙы тасуирлаусы картиналар ҙур урын алып тора. Күргәҙмәлә Дәүләткилдиев, Урядов, Герасимов, Тюлькин, Усманов һ.б. әҫәрҙәре бар.

**27 февраль.** «Ишембайнефть» тресы эшселәре «Үҙең өсөн генә түгел, ә фронтҡа киткән иптәшең өсөн дә эшлә» тигән девиз менән эшләүгә күсте. Был хәрәкәт республикала киң таралды. Мәҫәлән, һуғышҡа тиклем һәр механик 4 буровойҙы хеҙмәтләндерһә, хәҙер ул 12-не, һәр слесарь 1 буровойҙы булһа, хәҙер 2-не хеҙмәтләндерә.

Буровиктар слесарҙарҙы ла алмаштыра башланы. Икенсе һөнәрҙе үҙләштереү өсөн курстар асылды. Бындай курстарҙа бөтәһе 300 кеше шөғөлләнә. Оператор Ҡалогшин слесарь һөнәренә, токарь Нагаева шофер һөнәренә өйрәнде. Быраулау мастерҙары Смоленков һәм Лукьяновтар хәҙер бер үк ваҡытта 2 скважинала быраулайҙар. Ишембай промыслаларында бындай метод беренсе тапҡыр ҡулланыла.

**28 февраль.** Стәрлетамаҡтың Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводында эшләп сығарыу көсө 15—20 процентҡа күтәрелде.

Эшселәр Ҡыҙыл Армияның 24 йыллығын ҡаршылау вахтаһына баҫты, һәр эшсенең станогы эргәһенә алған йөкләмәһен һәм уның үтәлешен сағылдырған таҡта ҡуйылған. Ошо вахтаға баҫҡан слесарь Ҡонкин цехтан сыҡмай 4 смена эшләне. Ҡайһы бер эшселәр производство нормаһын 300 процентҡа үтәй.

**1 март.** Өфөлә «Тарас Шевченко һәм Украина сәнғәте» тигән темаға лекция-концерт уҙғарылды. Уны орденлы шағир М.Рыльский һәм композитор Ф.Ҡозицкий алып барҙы. Бөйөк яҙыусының тыуыуына 128 йыл, ә үлеүенә 81 йыл тулыуҙы билдәләп, Украина Фәндәр академияһы сессия уҙғарҙы.

**10 март.** Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективы бензин эшләп сығарыу планын арттырып үтәне. Заводтың иң эре ҡоролмаларының береһе «Луммус», нефть һәм дистиллят етештереү планын үтәп, Дәүләт Оборона Ҡомитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы менән бүләкләнде.

**15 март.** Промышленность предприятиелары колхоздар һәм МТС-тарға шефлыҡ ярҙамы күрһәтеп тора. 3-сө һанлы төҙөлөш тресы эшселәре БашЦИҠ исемендәге совхозға 27 трактор, 50 сәскес, 52 һабан һәм башҡа машиналар ремонтлап бирҙе.

**26 март.** Республиканың ауыл хужалығы эшсәндәрен культуралы хеҙмәтләндереү өсөн Башҡорт дәүләт филармонияһы 10 концерт бригадаһы төҙөп, төрлө райондарға ебәрҙе. Был бригадалар бөтәһе 20 районда булып, 520 концерт бирергә тейеш.

**27 март.** Өфө нефть эшкәртеү заводының фәнни-тикшеренеү лабораторияһы инженерҙары М.З.Мәүлетова һәм Л.Ф.Чернявская нефтте тоҙҙан таҙартыуҙың яңы юлын уйлап таптылар. Һөҙөмтәлә, завод нефтте таҙартыу өсөн кәрәкле реагентты ситтән индереүҙән ҡотолдо.

**28 март.** Сталинград комсомолецтарының трактор һәм башҡа ауыл хужалығы машиналарын ремонтлау өсөн запас частар, инструменттар йыйыу тураһындағы башланғысы бөтә илдең комсомол ойошмаларында яҡлау тапты. Республикабыҙҙың моторҙар эшләү заводының комсомолецтары һәм йәштәре ошо ваҡыт эсендә генә 10 меңдән ашыу инструмент һәм запас частар йыйҙы.

Төҙөлөш тресы комсомолецтары МТС-тарға 770 дана запас частар тапшырҙы.

**29 март.** Өфөгә эвакуацияланған Мәскәү яҙыусылары секциялары ижади кисә үткәрҙе. Унда күп кенә яҙыусыларҙың әҫәрҙәре тикшерелде.

Украина ССР-ның атҡаҙанған артистары Бэм, Заак, Минаев һ.б. ҡатнашлығында сәнғәт һәм фән лекторийы конференция үткәрҙе.

Украина Фәндәр академияһында Менделеев исемендәге Бөтә Союз химиктар ойошмаһының ултырышы асылды.

**17 апрель.** СССР Совнаркомы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты «Колхозсылар өсөн хеҙмәт көнөнөң һанын күтәреү тураһында» ҡарар ҡабул итте. Уны күп колхозсылар ҙур күтәренкелек менән ҡаршы алды. Мәҫәлән, Илеш районының Калинин исемендәге, «Һабансы», «Уңыш», «Ҡыҙыл юл» һ.б. колхоздарында йыйылыштар булып, колхозсылар өҫтәмә рәүештә 80—100 эш көнө эшләргә йөкләмә алды.

**18 апрель.** Башҡорт дәүләт медицина институтында невропатологтар һәм психиатрҙарҙың дөйөм конференцияһы асылды. Нерв системаһының зарарланыуы проблемаһына ҡағылған 20-гә яҡын доклад тыңланды.

**26 апрель.** Башҡорт дәүләт филармонияһында яңы программа буйынса эстрада һәм цирк артистарының ҙур концерты бирелеп, уның аҡсаһы Ҡыҙыл Армия яугирҙәренә 1 Май байрамына бүләктәр алыу өсөн тапшырылды.

**9 май.** Башҡорт опера һәм балет театры бинаһында бөйөк украин композиторы һәм музыка белгесе Н.В.Лысенконың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған тантаналы кисә булып үтте. Ултырышты Украина Фәндәр академияһының президенты академик А.А.Богомолец асты. Композиторҙың тормош юлы һәм ижады тураһында Украина ССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре профессор Н.А.Гринченко һөйләне.

**10 май.** Республикала моторҙар эшләп сығарыу 1941 йылдың сентябре менән сағыштырғанда 11,5 тапҡырға артты.

**15 май.** Республикала пландан тыш «Оборона гектарҙары» сәсеү өсөн патриотик хәрәкәт башланып китте. Уның уңышы оборона фондына тапшырыла. Уларҙың майҙаны — 10750 гектар.

**20 май.** Ауыр һуғыш дәүеренә ҡарамаҫтан, юғары һәм урта махсус белем биреү уҡыу йорттарында уҡыусы студенттарҙың һаны артты. Ошо уҡыу йылында институттарҙа уҡыусылар һаны 2574-тән 3764-кә, техникумдарҙа һәм училищеларҙа 5,7 меңгә етте.

**22 май.** ВКП(б) Өлкә Комитеты ҡарары буйынса промышленность предприятиеларында һәм дәүләт учреждениеларында ярҙамсы хужалыҡтар ойоштоолдо.

**25 май.** Республикала бөтәһе 29 мең яңы эшсе әҙерләнде. Уларҙың 24 меңе завод, фабрика цехтарында өйрәтелһә, 5 меңе хеҙмәт резервтары мәктәптәрендә уҡыны.

**26 май.** Илдең күренекле машинисы Н.А.Лунин миҫалында тимер юлдарҙа боевой подразделениелар төҙөлдө. Ҡуйбышев тимер юлының Башҡортостан бүлексәһендә лә ошондай 20 подразделение ойошторолдо. Улар хеҙмәт тәртибен боҙмаҫҡа, эштә брак булдырмаҫҡа һәм көндәлек норманы арттырып үтәргә йөкләмә алды. Тимер юлсылар үҙ сменаларында намыҫ менән эшләй. Йөк тейәү һәм бушатыу эше һәр ваҡыт арттырып үтәлә. Дошманға булған нәфрәт, совет патриотизмы тимер юлсыларҙа эшләп сығарыу һәләтен күтәреүҙең яңы ысулдарын тыуҙыра.

**29 май.** ВКП(б) Үҙәк Комитеты һәм СССР Совнаркомы ҡарары буйынса уңыш алыуҙың планын арттырып үтәгән механизаторҙарға өҫтәмә түләү индерелде. Бындай түләү малсылар өсөн дә ҡаралған. Башҡортостанда һәр өлкән колхозсы йылына 120 хеҙмәт көнө, ә үҫмерҙәр 50 хеҙмәт көнө эшләргә тейеш. Уларҙың күбеһе был планды 2—3 тапҡырға арттырып үтәне.

**1 июнь.** СССР Верховный Советы Указы менән рәссам М.В.Нестеров 80 йәше тулыу айҡанлы Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде. Уға РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре исеме бирелде.

**3 июнь.** Өфөлә Шапито циркы йәйге сезонын башлап ебәрҙе. Программала — сиған цирк аттракционы.

**5 июнь.** Республика промышленносының валовой продукцияһы 1940 йыл менән сағыштырғанда 2,5 тапҡырға артты.

**6 июнь.** Өфө моторҙар эшләү заводы Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы менән бүләкләнде.

**10 июнь.** Өфөнән колхоз, совхоз һәм МТС-тарға 150 ремонтсылар бригадаһы китте.

**19—20 июнь.** Өфөлә Украина Фәндәр академияһы фашизмды фашлауға арналған ғилми конференция үткәрҙе. Унда күренекле ғалимдар, фән эшмәкәрҙәре совет фәненең немец фашистарына ҡаршы көрәштәге роле, раса теорияларының ялғанлығы, фашист системаһының йыртҡыслығы тураһындағы темаларға докладтар һөйләне.

**27 июнь.** Өфөгә эвакуацияланған М.Коцюбинский музейында Украина рәссамдарының күргәҙмәһе асылды.

Башҡорт сәнғәтен үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Указы менән опера һәм балет театрының бер төркөм артистары — Т.Г.Имашев, П.М.Славинскийға — Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән маҡтаулы исемдәр, Б.Н.Вәлиеваға, Х.Л.Ғәлимовҡа, З.З.Илбаеваға, Г.С.Хәбибуллинға БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы исеме бирелде.

**28 июнь.** Башҡортостанда ҡатын-ҡыҙҙарҙан 87 трактор бригадаһы төҙөлдө. Улар ауыл хужалығы эштәрен ваҡытында бөтөрөү өсөн Бөтә Союз ярышына ҡушылды. Улар араһынан Шишмә районынан тракторсы Сәғиҙә Юнысова яҙғы сәсеү планын 264 процентҡа үтәп, 136 килограмм яғыулыҡ экономияланы, Ҡандра МТС-ынан тракторсы Зәкиә Фазлыәхмәтова план буйынса 52 гектар урынына 102 гектар ер һөрҙө.

Башҡорт опера һәм балет театры залында Мәскәү художество мәктәбенең һәләтле уҡыусыларының күргәҙмәһе асылды. Күргәҙмәлә һүрәттәр, плакаттар урын алған.

Башҡорт дәүләт драма театры артистары республиканың төньяҡ-көнбайыш райондарына йәйге гастролдәргә сығып китте.

**7 июль.** Украина ССР-ының йыр һәм бейеү ансамбле Өфө нефть эшкәртеү заводында үҙенең гастролдәрен башлап ебәрҙе. Бынан тыш, ул Стәрлетамаҡ, Ишембай, Бөрө ҡалаларында концерт бирәсәк.

**10 июль.** Республика комсомолецтары һәм йәштәре хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең балаларына ярҙам фондына 520 һум аҡса һәм 25 мең төрлө балалар кейемдәре, уйынсыҡтар һ.б. әйберҙәр йыйҙы.

**18 июль.** Өфө паровоздар ремонтлау заводы планды арттырып үтәгәне өсөн Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы менән бүләкләнде. Ошоға дәртләнеп, заводтың стахановсылары Сысоев, Пелешев, Волюженец сменаға өс норма бирҙе.

Ҡойоу цехы стахановсыһы Старуев көнөнә 3—4 смена нормаһы бирә. Формовщик Костырка дүрт кеше өсөн эшләй.

**7 август.** Республикала ике ай элек иғлан ителгән ауыл хужалығы эшсәндәре араһында Бөтә Союз социалистик ярышының барышы ҡаралып, унда Бүздәк совхозы, Дүртөйлө, Дәүләкән, Имәнлекүл МТС-тары еңеүсе булды. Дүртөйлө МТС-ынан Фәүзиә Ҡаһарманова етәкселек иткән ҡатын-ҡыҙҙар трактор бригадаһы республикала 1-се урынды яуланы.

**8 август.** ВКП(б) Өлкә Комитеты ҡарары буйынса уңыш йыйыу кампанияһын үткәреү өсөн колхоз һәм совхоздарға етәкселәрҙән 50 кеше, ҡалаларҙың партия һәм комсомол активистарынан 3000 тәжрибәле агитатор ебәрелде.

**10 август.** Үҙ теләктәре менән фронтҡа киткән комсомолецтарҙың һаны 7755 кешегә етте.

**11 август.** Башҡортостан Ҡыҙыл Армияға 50 мең ат, 10 мең йөк арбаһы, 10 мең автомашина һәм трактор бирҙе.

Республикала төҙөлгән 214-се уҡсылар дивизияһы фронтҡа оҙатылды.

**17 август.** Промышленность предприятиеларындағы кеүек, колхоз һәм совхоздарҙа ла комсомолец-йәштәр бригадалары ойошторолоп, уларҙың 1614-е республика баҫыуҙарында эшләй башланы.

**14 сентябрь.** Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективы август айы планын арттырып үтәгәне өсөн Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы менән бүләкләнде. Ошо уңай менән нефть промышленносы халыҡ комиссары И.К.Седин ҡотлау хаты ебәрҙе.

Башҡорт АССР-ы Наркомпрос лекция бюроһы Украина Фәндәр академияһы менән берлектә СССР тарихы буйынса лекциялар циклы ойошторҙо.

**15 сентябрь.** Баймаҡ колхоз театры республиканың көньяҡ райондарынан гастролдәрҙән ҡайтты. Театр артистары урындарҙа йәштәрҙең художество үҙешмәкәр түңәрәктәренә ҙур ярҙам күрһәтте, 105 урында кисәләр үткәрергә ярҙамлашты һәм 25 номер стена газетаһы сығарышты.

Составында 100 кеше булған ВЦСПС бейеү һәм йыр ансамбле Мәскәүҙән Өфөгә килде. Улар республика райондарында ла сығыш яһаясаҡ.

Башсовнарком залында фашизмға ҡаршы көрәшеүгә арналған кисә үткәрелде. Унда Советтар Союзы Геройы генерал-майор Я.Крейзер, Украина Фәндәр академияһы член-корреспонденты И.Г.Спивак, яҙыусыларҙан В.Сосюра, Н.Рыбак, Б.Бикбай, С.Ҡудаш һ.б. сығыш яһаны, һуңынан концерт бирелеп, уның аҡсаһы оборона фондына тапшырылды.

**17 сентябрь.** Башҡорт академия драма театрының бер төркөм артистары уңыш йыйыу осоронда ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәрен культура саралары менән тәьмин итеү өсөн райондарға сыҡты.

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитетында лекторий асылды. Ул совет халҡының Германия фашизмына ҡаршы Бөйөк Ватан һуғышы, СССР халыҡтарының үткәне, промышленность һәм ауыл хужалығы предприятиеларының экономикаһы тигән циклдарҙы эсенә ала.

**5 октябрь.** Был осорҙа күп кенә етәксе урындарҙа ҡатын-ҡыҙҙар эшләне. Мәҫәлән, республиканың 193 колхозын ҡатын-ҡыҙҙар етәкләй.

**7 октябрь.** Өфө моторҙар эшләү заводы партия-техник конференцияһы үткәрҙе. Завод директоры В.П.Баландиндың докладында хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, сырье, материалдарҙы экономиялау төп урынды алды.

**10 октябрь.** Республика мәктәптәре уҡытыусылары һәм уҡыусылары ауыл хужалығы эшендә ҡатнашып, 12 миллион хеҙмәт көнө эшләне.

**16 октябрь.** Башҡортостанда СССР-ҙың Ҙур театры солисы, илдең танылған йырсыларының береһе В.Борисованың гастролдәре башланды. Был — Башҡортостандың театр тормошонда ҙур ваҡиға.

**31 октябрь.** Өфө моторҙар эшләү заводында Зоя Ҡосмодемьянская исемендәге комсомол фронт бригадаһы йәштәре Бөйөк Октябрҙең 25 йыллығын лайыҡлы ҡаршылау өсөн бөтә завод коллективына мөрәжәғәт ҡабул итте. Бригада коллективы йөкләмәләрен яңынан ҡарап, көндәлек норманы октябрь айында сентябрь менән сағыштырғанда 16 процентҡа, майҙы 30 процентҡа экономияларға, бракты 3 процентҡа кәметергә булды.

Е.Пятницкий исемендәге рус халыҡ хоры Өфөлә сығыш яһаны.

**2—4 ноябрь.** Украина Фәндәр академияһы Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 25 йыллығына арналған юбилей сессияһын үткәрҙе. Унда академия президенты А.Богомолецтың доклады тыңланды.

Сессия эшләгән арала Украина рәссамдарының күргәҙмәһе ойошторолдо. «25 йыл эсендә Украина экономикаһы» тигән йыйынтыҡ сығарылды.

**29 ноябрь.** Башҡорт драма һәм опера театрҙары артистары Өфө студенттары һәм өлкән класс уҡыусылары өсөн ҙур концерт бирҙе.

**6 декабрь.** Өфөлә И.Ньютондың тыуыуына 300 йыл тулыуға арналған сессия асылды. Унда академик А.Лейтунскийҙың инеш һүҙенән һуң, академик М.Лаврентьев, физика-математика фәндәре докторы С.Пекара, философия фәндәре докторы О.Трахтенберг, профессор И.Идельсон, А.Орлов һ.б. докладтар менән сығыш яһаны.

**10 декабрь.** ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Ҡомитеты колхозсыларға аҙыҡ-түлектәренең бер өлөшөн эшселәргә һатыуҙы ойоштороуҙы һорап мөрәжәғәт итте. Беренсе булып Тәтешле районы колхозсылары яуап бирҙе. Тиҙҙән күп кенә райондарҙан Өфө, Стәрлетамаҡ, Белорет ҡалаларының эшселәренә 35 мең бот аҙыҡ оҙатылды.

**11 декабрь.** Башҡорт академия драма театры залында Башҡортостан рәссамдарының Бөйөк Октябрҙең 25 йыллығына арналған ижади отчет күргәҙмәһе асылды.

**15 декабрь.** Өфө районының Ромашенко исемендәге колхоздың колхозсылары танк колоннаһы төҙөүгә аҡса йыйыу тураһында мөрәжәғәт ҡабул итте. Бер нисә көн эсендә генә лә ҡайһы бер райондарҙың хеҙмәтсәндәре 2—3 миллион һум аҡса йыйып бирҙе. Күп кенә колхозсылар 20—50 мең һум шәхси аҡсаларын тапшырҙы.

**30 декабрь.** Украина ССР-ының 25 йыллыҡ юбилейына арналған Фәндәр академияһы сессияһында 100-ҙән ашыу доклад тыңланды.

## 1943 йыл

**1 ғинуар.** Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәре 1942 йылдың дәүләткә ит тапшырыу планын 101,5 процентҡа үтәне һәм 1943 йыл иҫәбенә 71 мең 687 центнер ит һатты. Айырым райондар яңы йылды айырыуса ҙур еңеүҙәр менән ҡаршылай. Борай районы планды — 135 процентҡа, Архангель районы — 134,7, ә Нуриман районы 121 процентҡа үтәне.

Белорет металлургия заводының домна цехы йыллыҡ планын 1942 йылдың 8 декабренә тултырҙы.

**3 ғинуар.** Ағас әҙерләү һәм ташыу буйынса Бөрйән леспромхозына

беркетелгән Күгәрсен районы үткән йылдың IV квартал планын 25 декабргә 172 процентҡа үтәне, ә Йомағужа районы 102,3 процентҡа еткерҙе.

Шаран районы Ерекле МТС-ы коллективы тракторҙарҙы ремонтлау планын үтәп кенә ҡалманы, декабрь айында ғына ла 4 мең 800 һумлыҡ иҫке частарҙы яңыртып эшләне. МТС эргәһендә ремонтсылар өсөн техник уҡыу ойоштоpолдо.

Баймаҡ МТС-ы эшселәре эш нормаларын даими рәүештә 200 процентҡа үтәй. Улар МТС коллективын социалистик ярышҡа саҡырҙы.

**4 ғинуар.** Һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә өлгөлө эшләгәндәре өсөн 8 кеше Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Почет грамотаһы менән бүләкләнде (Г.В.Әминев, Ш.Ҡ.Ғафаров, П.В.Иванов, Е.Н.Марков, В.М.Шугаева, В.В.Овсянников, А.Я.Тимашев, А.В.Чубуков). Врачтар М.В.Антиповҡа (хәрби врач, госпиталь начальнигы), Р.А.Ҡотлобаеваға һәм А.Я.Соколовҡа Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған врачы исеме бирелде.

**5 ғинуар.** Башҡортостан колхозсылары «Башҡортостан истребителе» авиаэскадрильяһы төҙөүгә аҡса биреүҙе дауам иттеләр. Улар бер көн эсендә 98 миллион 784 мең һум аҡса йыйҙы. Айырым колхозсылар, мәҫәлән, Кушнаренко районы «Ҡыҙыл байраҡ» колхозы председателе С.Турьянов, Буденный исемендәге колхоз председателе З.Мәүлетов был фондҡа 50-шәр мең һум аҡса тапшырҙы.

**6 ғинуар.** Түбә руднигы коллективынан забойщиктар Байназаров, Ҡәримов, Хәсәншин иптәштәр эш нормаларын һәр ваҡыт 200 процентҡа үтәй. Ҡайһы бер бригадалар сменаға икешәр, өсәр норма бирә. Рудникта экономия өсөн көрәш киң йәйелдерелгән. Механика цехы эшселәре ноябрь айында ярыулыҡҡа 5,6 процент экономия яһаны. Ҡочегарҙар Ильин һәм Блинов бер айҙа 29 кубометр утын экономияланы.

Өфө районы «Прожектор» колхозы эшселәре, И.В.Сталиндың Башҡортостан колхозсыларына ебәргән ҡотлау телеграммаһына яуап итеп, Ҡыҙыл Армияның ашлыҡ фондына иген тапшыра башланы. Ҡолхоздың был башланғысын райондың бөтән хужалыҡтары ла яҡлап сыҡты.

**7 ғинуар.** Украина Яҙыусылар союзының Украина ССР-ның 25 йыллығына арналған пленумы асылды. Унда Башҡортостандың партия һәм хөкүмәт етәкселәре лә ҡатнашты. Академик Максим Рыльский «Украин совет поэзияһына — 25 йыл», Павло Тычина «Украина культураһы 25 йыл эсендә» тигән темаларға докладтар һөйләне. Академик А.А.Богомолец, поляк яҙыусыһы Ванда Василевская, еврей яҙыусыһы Рефер, башҡорт яҙыусыһы Х.Ҡәрим сығыш яһаны.

«Башҡортостан комсомолы» авиаэскадрильяһы төҙөүгә йыйылған 5 миллион 197 мең һум аҡса өсөн республика комсомолецтары һәм йәштәре исеменә Ҡыҙыл Армиянан рәхмәт хаты килде.

**10 ғинуар.** Өфөлә рус, украин, башҡорт, еврей яҙыусылары ҡатнашлығында ҙур әҙәби кисә булды. Ҡисәлә А.Ҡорнейчук, Ю.Яновский, П.Тычина, М.Рыльский, Н.Рыбак, А.Малышко, М.Изага, Ю.Смолич, Р.Ниғмәти, Х.Ҡәрим, С.Ҡудаш һ.б. ҡатнашты. Һуңынан ҙур концерт күрһәтелде.

**12 ғинуар.** Өфө вагондар депоһы коллективы Ҡыҙыл Армияның 25 йыллығы хөрмәтенә башланған социалистик ярышҡа ҡушылып, ғинуар һәм февраль айҙарының заданиеһын өслөтә арттырып үтәргә йөкләмә алды.

Белорет металлургия заводының домна цехы эшселәре «Советтар Союзында иң яҡшы домна цехы» тигән маҡтаулы исемде айҙан-айға үҙ ҡулында тотоп килә.

**15 ғинуар.** ВКП(б) Өлкә Ҡомитеты эргәһендә партияның ҡала, район комитеты пропаганда һәм агитация бүлектәре мөдирҙәренең, ҡала һәм район газеталары редакторҙарының бер аҙналыҡ семинар-кәңәшмәһе эшләй башланы. Ҡәңәшмәлә партия пропагандаһы, агитация, матбуғат эше мәсьәләләре буйынса докладтар һәм лекциялар буласаҡ.

**16 ғинуар.** Саҡмағош районы Фрунзе исемендәге колхоздың малсылары дәүләт планын 200 процентҡа үтәне.

Учалы районы колхозсылары Сталинградты һаҡлаусыларға 41 мең боттан артыҡ ит, 568 пар бийма, 800 пар бейәләй, ойоҡбаш һәм башҡа төрлө әйберҙәр ебәрҙе. Самолет төҙөүгә улар 1 миллион 900 мең һум аҡса йыйҙылар.

Хәрби самолеттар төҙөүгә аҡса туплау дауам итә. «Шишмә» колхозынан бригадир Шәрәфетдинов районда беренсе булып 25 мең һум аҡса индерҙе. «Күмәк көс» колхозынан Ф.Баязитова, М.Әхмәтовтар ҙа 25-әр мең һум аҡса тапшырҙылар.

Был фондҡа Учалы МТС-ы эшселәре 265 мең һум, комбайнсылар М.Мансуров, Я.Тимербаев, А.Ғәзизовтар һәр береһе 10-ар мең һум, элекке фронтовик, комбайнсы Михайлов 6 мең һум аҡса бирҙе.

**17 ғинуар.** Республика комсомолецтары һәм йәштәре «Башҡортостан комсомолы» авиаэскадрильяһы төҙөүгә 5 миллион 179 мең һум, шул уҡ исемдәге танк колоннаһына 381 мең һум, «Башҡортостан пионеры» танк колоннаһы өсөн 193 мең һум аҡса индерҙе.

**19 ғинуар.** Малаяҙ МТС-ы 80 мең һумлыҡ продукция, 44 тонна яғыулыҡ экономияланы.

МТС тракторҙар ремонтлауҙы 140 процентҡа, сәскес машиналарын ремонтлау планын 221 процентҡа үтәне, 727 дана деталь әҙерләне, 57 деталде яңыртып эшләне. Тракторҙар ремонтлау буйынса тик бер ай эсендә генә лә 16 мең һум экономия яһалды.

МТС эшселәре Салауат Юлаев исемендәге авиаэскадрилья төҙөү өсөн 50 мең һум аҡса, Ҡыҙыл Армияның аҙыҡ фондына 30 боттан ашыу иген тапшырҙы.

**20 ғинуар.** Ауырғазы районы потребкооперацияһы эшселәренең фронтҡа киптерелгән картуф һәм йәшелсәләрҙе күберәк бирергә саҡырыуына республиканың башҡа райондары потребсоюз работниктары ла ҡушылды. Социалистик ярышҡа ҡушылған күп кенә потребсоюздар картуф һәм йәшелсә киптереүҙә ҙур уңыштарға иреште. Ауырғазы районы сезон планын апрель башына тултырыу урынына 1 ғинуарға тамамланы, ә Ҡариҙел районы 155 процентҡа, Ғафури районы 130 процентҡа үтәне.

Октябрь революцияһы исемендәге суднолар ремонтлау заводының механика цехы планды даими рәүештә арттырып үтәп килә. Стахановсыларҙан Беленко, Крушенко иптәштәр көндәлек нормаларын 454 процентҡа үтәйҙәр.

1-се цех коллективы 1942 йылда файҙаланылмаған отпускылары өсөн тейеш булған компенсацияны Ҡыҙыл Армияны ҡоралландырыу фондына бирергә тәҡдим индерҙе. Был яңылыҡ бөтә заводҡа таралып, завод коллективы Йылға флоты наркоматының бөтә предприятиеларын үҙҙәренән өлгө алырға саҡырҙы.

**21 ғинуар.** Республика колхозсылары хәрби самолеттар төҙөүгә 100 миллиондан артыҡ аҡса йыйып бирҙе. Шишмә районы колхозсыларының 130 ылауҙан торған ҡыҙыл обозы ҡалаға килде. Унда 180 центнер ит, 14 центнер ҡош ите, 1658 дана йомортҡа, 16 центнер ярма һ.б. аҙыҡ-түлек бар.

**22 ғинуар.** Тау ҡорамалдары заводына Боҙаяҙ районы колхоздарынан 70 ылау менән аҙыҡ килде.

**30 ғинуар.** ВКП(б) Өлкә Комитетында МТС директорҙарының кәңәшмәһе булып үтте. Унда МТС-тарҙа тракторҙар паркын, ауыл хужалығы инвентарҙарын ремонтлау һәм механизаторҙар кадрҙарын әҙерләү барышы тыңланылды.

**2 февраль.** Ҡыҙыл Армияның уңышлы һөжүме менән рухланып, колхозсылар йылы кейем йыйыуҙы башлап ебәрҙе. Тәтешле районының Калинин исемендәге колхозында 13 тун, 22 пар бийма, 14 пар йөн ойоҡбаш, 12 һырыған салбар, 7 бүрек, 3 йылы күлдәк һ.б. йыйылды.

ВЛКСМ Өлкә Комитеты Ҡыҙыл Армияның 25 йыллығы хөрмәтенә 14 февралдән 1 мартҡа тиклем республикала профсоюз-комсомол саңғы кросы үткәрергә булды.

**3 февраль.** Белорет ҡалаһы хеҙмәтсәндәре «Белорет металлургы» исемле хәрби самолеттар төҙөүгә 3 миллион 52 мең һум аҡса йыйҙы. Аҡса йыйыу дауам итә.

Салауат районы хеҙмәтсәндәре тимер юл эшселәре өсөн — 60, Стәрлетамаҡ районы колхозсылары Н. заводы эшселәренә 92 ылау аҙыҡ килтерҙе.

**7 февраль.** Республика хеҙмәтсәндәре Дәүләт Оборона Комитеты Председателенән «Башҡортостан истребителе» авиаэскадрильяһы төҙөүгә 87 миллион 294 мең 252 һум аҡса йыйып тапшырыу айҡанлы рәхмәт телеграммаһы алды.

Яңауыл районы «Париж коммунаһы» колхозы председателе Рәхимә Ғәйнетдинова хәрби самолет төҙөүгә 50 мең һум аҡса индерҙе.

**8 февраль.** Республикабыҙҙың урман промышленносы эшселәре 1942 йыл планын 124 процентҡа үтәп, пландан тыш 13 мең кубометр ағас әҙерләне. Тырыш хеҙмәттәре өсөн уларҙың бер төркөмө хөкүмәтебеҙҙең ордендары һәм миҙалдары менән бүләкләнде: Ленин ордены менән 1 кеше, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән — 14, «Почет Билдәһе» ордены менән — 14, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» миҙалы менән — 18, «Хеҙмәт отличиеһы өсөн» миҙалы менән 10 кеше.

**10 февраль.** Борай районы хеҙмәтсәндәре хәрби самолеттар төҙөүгә 2 миллион 46 мең 286 һум аҡса индерҙе һәм фронтҡа 3 вагон бүләк ебәрҙе.

**11 февраль.** Йылайыр районы хеҙмәтсәндәре, Ҡыҙыл Армияның уңышлы һөжүме менән рухланып, фронтҡа ярҙамды көсәйтә. Улар хәрби самолеттар төҙөүгә 561 мең 859 һум, танк колоннаһына 51 мең 249 һум, оборона фондына 101 мең 749 һум аҡса тапшырҙы һәм 94 мең 830 һумлыҡ дәүләт заемы алды.

Әбйәлил МТС-ында тракторҙар ремонтлау ҡыҙыу темп менән бара. Ғинуар айында 9 трактор урынына 11 трактор ремонтланып, план 121 процентҡа үтәлде һәм 8 мең 840 һумға экономия яһалды.

**16 февраль.** Өфө ҡалаһы Киров районындағы 18-се мәктәптә 98 фронтовик балаһына аяҡ, өҫ кейеме һәм аҡсалата ярҙам ойошторолған, шулай уҡ улар иртәле-кисле түләүһеҙ ашау өсөн ашханаға беркетелгән.

**17 февраль.** Үткән йыл республика хеҙмәтсәндәре Ҡыҙыл Армияны ҡоралландырыу өсөн 179 миллион 540 мең һум аҡса тапшырғайны. Бынан тыш, улар бер нисә дивизияны тәьмин итерлек — ярты миллион дананан артыҡ йылы кейемдәр йыйҙы. 180 вагон аҙыҡ-түлек, 500 мең дана шәхси бүләктәр оҙатты. Ҡыҙыл Армияның 25 йыллыҡ юбилейына ҡарата беҙҙең делегация фронтҡа 40 вагон ит продукттары, 15 вагон кондитер әйберҙәре, 2 вагон бал, 1 вагон май, 3 вагон тәмәке, 100 мең дананан артыҡ шәхси бүләктәр алып китте.

**20 февраль.** СССР Ер эштәре Халыҡ Комиссариатының приказы менән Башҡортостан буйынса 130 кеше «Социалистик ауыл хужалығы отличнигы» значогы менән бүләкләнде. Улар араһында Дүртөйлө МТС-ы тракторсыһы Ғәлимә Мисбахова ла бар. Ул бер сменала 528 гектар ер һөрөп, 1624 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Белорет металлургия заводы домнасылары, Бөтә Союз социалистик ярышында яулап алған алдынғылыҡты бирмәй, Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағын, «Советтар Союзының иң яҡшы домна цехы» исемен үҙҙәрендә һаҡлап ҡалды. Цех ғинуар айында 6120 кубометр күмер экономиялап, планды 104,4 процентҡа үтәне.

**26 февраль.** Фронтовик ғаиләләренә 660 мең һум аҡсалата ярҙам күрһәтелде, 6653 фронтовик балаһы балалар баҡсаларына һәм балалар йорттарына, 434 бала ФЗО мәктәптәренә урынлаштырылды.

**3 март.** Республика хеҙмәтсәндәренә Көньяҡ-көнсығыш фронт командованиеһынан (командующийы армия генералы Ватутин) рәхмәт хаты килде.

Хатта хеҙмәтсәндәр тарафынан йыйылған аҡсаға истребителдәр эскадрильяһы төҙөлөүе тураһында әйтелә. Башҡорт атлы дивизияһынан Атаев етәкселегендәге 40 һалдаттың батырҙарса һуғыштары тураһында ла иҫкә алына бында.

**6 март.** Башҡортостан Ростов өлкәһенә ярҙамға 290 трактор, 281 һабан, 130 сәскес ебәрҙе.

**8 март.** Юғары хәрби уңышҡа өлгәшеүҙе тәьмин итеү өсөн Боҙаяҙ районы «Бүләк» колхозы комсомолецтары республиканың бөтә комсомолецтарына, йәштәренә, пионерҙарына һәм уҡыусыларына орлоҡ йыйыуҙы ойоштороуға өндәп мөрәжәғәт менән сыҡты. Үҙҙәре өлгө күрһәтеп, беренселәрҙән эшкә тотондо. Моратшин — 32 килограмм, Миңлебаева — 28, Ильясов 46 килограмм орлоҡ тапшырҙы. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бөтәһе 232 центнер орлоҡ йыйылды.

Был мөрәжәғәткә яуап итеп, Бүздәк районы колхозсылары 1584 бот иген, 14 мең 526 бот картуф орлоғо тапшырҙы.

Балтас районы Фрунзе исемендәге колхоз хеҙмәтсәндәре 53 центнер орлоҡ йыйып, колхоз бураһына һалды.

**14 март.** ВКП(б) Өлкә Комитеты һәм БАССР Совнаркомы радио-телефон селтәре аша район комитеты секретарҙарының һәм район Советы башҡарма комитеты председателдәренең кәңәшмәһен уҙғарҙы. Кәңәшмәлә сәсеүгә әҙерлек буйынса республикала ун көнлөк иғлан ителде.

**22 март.** Ҡазанда 6 республика милли театрҙарының республика-ара ижади кәңәшмәһе булып үтте. Унда беҙҙең республика ла ҡатнашты.

**24 март.** Өфөлә ФЗО мәктәптәре һәм һөнәрселек училищеларының ҡала йыйылышы булды. Тимер юл училищеһы 19 паровозды ремонтлауҙа ҡатнашты, ФЗО мәктәптәре бер йыл эсендә 10 миллион һумлыҡ продукция эшләне һәм үҙ нормаларын 120 процентҡа үтәне. Улар танк колонналары һәм самолет эскадрильялары төҙөү өсөн 700 мең һум аҡса тапшырып, хөкүмәт исеменән ҡотлау хаты алды, тип әйтелде.

**27 март.** Башҡорт академия драма театры коллективы дүрт ай эсендә 93 ауылда 189 спектакль ҡуйҙы.

**28 март.** Баш ҡалабыҙҙа республика комсомолы активы кәңәшмәһе уҙғарылып, унда Башҡортостандың бөтә комсомолецтарына, пионерҙарына, уҡыусыларына, бөтә йәштәренә хат ҡабул ителде.

**29 март.** Өфөлә, республика китапханаһында китап, журнал, газеталар күргәҙмәһе асылды.

Ҡыҙыл Армия йортонда бөйөк пролетар яҙыусы М.Горький ижадына арналған лекция-концерт уҙғарылды һәм «Тормош төпкөлөндә» тигән спектакле күрһәтелде.

**1 апрель.** Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Х.Заимов һәм А.Спадавеккианың «Аҡбуҙат» операһын тикшереүгә арналған ижади кәңәшмә булып үтте. Унда артистар, драматургтар ҡатнашты.

**2 апрель.** Илеш районында хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләренә ярҙам итеү ун көнлөгө үткәрелде. Бер меңдән ашыу агитатор, коммунист, комсомолецтар, был ғаиләләрҙең өйҙәренә йөрөп, уларҙың йәшәү шарттарын тикшерҙе. Һәр бер ғаиләгә, мохтажлығына ҡарап, төрлө ярҙам күрһәтелде.

**6 апрель.** Республика колхоздары һәм совхоздарында ошо көнгә 4,5 мең ҡатын-ҡыҙ тракторсы, 1200 комбайнсы һәм 1700 комбайнсы ярҙамсыһы иҫәпләнә. «Ҡыҙҙар, тракторға!» тигән саҡырыу республикала ҙур яҡлау тапты.

13 башҡорт шағирының рус телендә «С отвагой в сердце» шиғырҙар йыйынтығы баҫылып сыҡты.

**7 апрель.** Ленинград рәссамы В.А.Кузнецов Белорет ҡалаһында йәшәй. Ул үҙенең «Атакаға», «Һуңғы һаҡлаусылар», «Үс алыусы», «Һалдаттарҙың ял ваҡыты» һ.б. картиналарын тамамлап, күргәҙмәгә ҡуйҙы.

**8 апрель.** Колхозсыларҙың һәм МТС эшселәренең партия сафына инеүҙәре артҡандан-арта. 1942 йылдың 1 ғинуарына партия ойошмалары һәм кандидат группалары 508 колхозда булһа, 1943 йылдың 1 ғинуарына уларҙың һаны 663-кә етте. Дәүләт планын үтәүҙә коммунистар һәр ваҡыт өлгө күрһәтә. Партия сафына яңы алынған Дүртөйлө МТС-ы бригадиры Ф.Ҡаһарманова үҙ планын 184,6 процентҡа үтәп, 6914 килограмм яғыулыҡ экономияланы.

**11 апрель.** Республика комсомолецтары һәм йәштәре Сталинградҡа ярҙам итеү буйынса башланған инициативаны яҡлап сыҡты. Республика күләмендә өмә үткәрелеп, унда 1220 кубометр ағас-төҙөлөш материалы әҙерләнде, Өфө ҡалаһы Молотов районындағы өмәлә 3 мең кеше ҡатнашты. Улар 20 мең һумлыҡ продукция бирҙе. Бында 5,3 тонна — сүкеп, 10 тонна ҡойоп яһалған металл әйберҙәр, 10 тонна слесарлыҡ инструменттары комплекты эшләнде. Өфө тимер юл узелы йорт кәрәк-яраҡтары һәм һәр төрлө ҡорамал менән бер вагон оҙатты. Бынан башҡа 15 мең дана матур әҙәбиәт, 500 дана дәреслек бар. Төҙөлөш тресы комсомолецтары 20 мең дана кирбес, шырпы фабрикаһы йәштәре 1,5 мең йәшник шырпы әҙерләне.

**17—19 апрель.** Өфөлә эшсе йәштәр художество үҙешмәкәр коллективтары олимпиадаһы булып үтте. Смотрҙа 10 завод һәм клуб түңәрәктәре ҡатнашты. ВЛКСМ Өлкә Комитеты беренсе урынды Өфө комсомолецтарына, 2-се — Ишембай, 3-сө урынды Стәрлетамаҡ йәштәренә тапшырырға ҡарар итте. Олимпиаданың 300-ҙән ашыу ҡатнашыусыһына ҡиммәтле бүләктәр бирелде.

**24 апрель.** Башҡортостан хеҙмәтсәндәре Ҡыҙыл Армияның 25 йыллығына бүләктәр йыйып, ике эшелон менән фронтҡа ебәрҙе. Бер эшелон Башҡорт кавалерия дивизияһына тәғәйенләнде.

**25 апрель.** Өфөлә Украина Фәндәр академияһының һәм Яҙыусылар союзының яҙыусы М.М.Коцюбинскийҙың үлеүенә 30 йыл тулыу көнөнә бағышланған йыйылышы булды. Бында украин ғалимдары, яҙыусылары, артистар менән бергә башҡорт яҙыусылары, урындағы партия, совет һәм башҡа ижтимағи ойошмаларҙың вәкилдәре ҡатнашты.

**27 апрель.** Тәтешле районы хеҙмәтсәндәре Сталинград ҡалаһын аяҡҡа баҫтырыуҙа ярҙам итеү өсөн әйберҙәр йыя башланы. «Спартак» колхозында 8 мең 800 һум аҡса һәм 90 кубометр төҙөлөш материалы, «Һабанаҡ» колхозында 12 мең һум аҡса, 110 кубометр ағас тупланды. Был эш башҡа колхоздарҙа ла бара.

**5 май.** «Фронт һәм тыл» тигән серияла 39 исемдә 165 мең дана матур әҙәбиәт, 200 мең дана хәрби йырҙар йыйынтығы баҫылып сыҡты, һуғыш башланған көндән алып бөтәһе 515 исемдә 1372 баҫма табаҡ, 3138,4 мең дана әҙәбиәт донъя күрҙе.

**15—17 май.** Башҡорт АССР-ы Наркомздравы һәм Украина Фәндәр академияһы медицина өлкәһендәге эҙләнеүҙәргә йомғаҡ яһау рәүешендә Өфөлә конференция үткәрҙе. Унда Биохимия институты хеҙмәтсәндәре менән берлектә профессорҙар, хирургтар, терапевтар сығыш яһаны. Яңы уйлап табылған $К^3$ витаминының әһәмиәте тураһында академик А.Палладин һөйләне.

**18 май.** 1 Май алды социалистик ярышына ҡушылып, республика промышленность һәм транспорт предприятиелары йәштәре ҙур уңыштарға өлгәште. Пландан тыш 6 паровоз, йөҙәрләгән тонна ҡорос, суйын, 3 мең йәшник шырпы һәм башҡа продукция етештерелде.

**22 май.** Башҡорт дәүләт филармонияһында республиканың йәш композиторҙары Р.Мортазин, Х.Әхмәтов, Х.Заимов, М.Вәлиев ижади кисә уҙғарҙы.

**1 июнь.** Башҡорт академия драма театры артистары республика райондарына йәйге гастролдәргә сыҡты. Унда яңы драма — «Ҡайтыу» ҡуйыласаҡ.

**5—7 июнь.** Башҡорт совет яҙыусыларының юбилей пленумы булды.

**27 июнь.** Өфөлә Украина Фәндәр академияһының сираттағы фәнни сессияһы асылды. Академик Вабло «Башҡортостандың халыҡ хужалығы

һәм ресурстары», Ряппо «С.Ҡудаш ижады», профессор Дмитров, Ҡузнецовтар «Башҡортостандың һоро күмере», Фиалков «Ишембай нефте», Маков «Башҡорт АССР-ның гидрогеологик район бүленеше» тигән докладтар менән сығыш яһаны. Башҡортостанға ҡағылышлы 40-тан ашыу доклад яһалып, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Украина Фәндәр академияһы институттары ғалимдары халыҡ хужалығы, медицина, үҫемлек һ.б. өлкәләрҙәгә тикшеренеүҙәренең һөҙөмтәле икәнен күрһәтте.

**3—4 июль.** Өфөлә һөнәрселек, тимер юл училищелары һәм ФЗО мәктәптәре отличниктарының беренсе республика конференцияһы булып үтте. Унда уҡыусыларҙың тырыш уҡыуы һәм хеҙмәте билдәләнде. Уҡыусылар махсус заказды үтәү буйынса июнь планын 123,5 процентҡа, тәүге ярты йыллыҡ планды 119,4 процентҡа үтәне.

**10 июль.** Башҡорт АССР-ы Совнаркомы 1 июлдә республиканың финанс активын 2-се дәүләт хәрби заемын уңышлы таратҡаны өсөн бүләкләү тураһында ҡарар сығарҙы. Бөтәһе 4361 кеше бүләкләнде.

**17 июль.** Украин ССР-ының күренекле культура эшмәкәрҙәре — академик П.Тычина, яҙыусы Ю.Яновский, архитектор Заболотный, һынлы сәнғәт профессоры Шевкуненко һ.б. Белорет ҡалаһы хеҙмәтсәндәре менән осрашты.

**19 июль.** Һуғышҡа тиклем Башҡортостанда химия промышленносы юҡ ине, эвакуацияланған заводтар нигеҙендә бер нисә химия предприятиеһы төҙөлдө. Шулар иҫәбендәге резина-техник изделиелар заводы ярты йыллыҡ дәүләт megandarын һәр ваҡыт алда үтәп, пландан тыш 976 мең һумлыҡ продукция етештерҙе һәм Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағын яуланы.

Заводтың эшсе һәм инженер-техник работниктарынан 3 кеше СССР ордендары һәм миҙалдары менән, 11 кеше «Социалистик ярыш отличнигы» значогы менән һәм 19 кеше Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Почет грамотаһы менән наградланды.

Бынан тыш, республикаға күсереп килтерелгән Рубежан химия комбинатының олеум цехы төҙөлөп бөтөп, эш башланы, һәм коллектив май айы планын 124,3 процентҡа үтәне. Тоҙ кислотаһы, каустик, хлор, хлорбензол һәм башҡа продукттар эшләп сығарған цехтар тиҙҙән эшкә ебәреләсәк. Олеум цехын ҡыҫҡа ваҡытта файҙаланыуға тапшырғаны өсөн заводтың 26 эшсеһе «Химия промышленносының социалистик ярышы отличнигы» значогы менән бүләкләнде.

**20 июль.** Уҙған йыл республика баҫыуҙарында 225 мең уҡыусы эшләгәйне. Уларҙың эше хөкүмәт тарафынан юғары баһаланды: 17 уҡыусы һәм 7 уҡытыусы ВЛКСМ Үҙәк Комитеты һәм РСФСР Наркомпросы грамоталары менән бүләкләнде.

Быйыл ауыл хужалығы эшендә план буйынса 137 мең уҡыусы урынына 138 мең уҡыусы эшләй.

**24 июль.** Хәйбулла районында 30 агитколлектив төҙөлдө. Унда 315 агитатор иҫәпләнә. Буребай рудлигындағы агитколлектив үҙ эшен матур ойошторҙо. Унда айға ике тапҡыр агитаторҙар өсөн семинар үткәрелә. Әңгәмәләр производство күрһәткестәре, стахановсыларҙың эш һөҙөмтәләрен пропагандалау менән тулыландырыла. Бөтә эшселәр производство планын арттырып үтәүгә ылыҡтырылған. Һөҙөмтәлә, рудник ярты йыллыҡ планды ваҡытынан алда үтәне.

**28 июль.** Стәрлебаш районында комсомол ойошмалары инициативаһы менән мал аҙығы әҙерләү буйынса өмә үткәрелде. Унда 2 мең кеше ҡатнашты. Ике көн эсендә 1500 тонна силос һалынды, 560 гектар ерҙә бесән эҫкертләнде, 210 гектар бесән сабылды һәм 110 тонна япраҡ аҙыҡ әҙерләнде.

**2 август.** Өфө ҡалаһы партия активының, ижади союздарҙың йыйылышы булды. ВКП(б) Өлкә Комитеты секретары С.Игнатьев бөгөнгө ҡеүек ауыр мәлдә совет интеллигенцияһының бурыстары тураһында доклад яһаны. Доклад буйынса фекер алышыуҙа УССР Фәндәр академияһы вице-президенты

академик Палладин, медицина институты профессоры Тереғолов, украин яҙыусыһы Ҡочерга, БАССР һаулыҡ һаҡлау наркомы Лоҡманов, академик Будников һ.б. ҡатнашты.

**10 август.** Республиканың иң ҙур вуздарының береһе — Башҡортостан дәүләт медицина институты үҙенең 10 йыллыҡ юбилейын байрам итте. Байрамға арналған фәнни-теоретик конференция булды. Юбилей йылында бөтәһе 129 врач диплом алып, эшкә башланы. Врачтарҙың күбеһе фронтҡа китте, ә 30-ы фашистарҙан азат ителгән Курск өлкәһе райондарына эшкә ебәрелде.

**11 август.** Салауат районында «Мәктәп көнө» үткәрелде. Өмәлә 3200 кеше, 1200 ылау ҡатнашты, 25 мәктәп тулыһынса ремонтланды һәм 200 кубометр утын ташылды.

**15 август.** Уҡытыусыларҙың республика кәңәшмәһе асылды. Кәңәшмәлә үткән уҡыу йылына йомғаҡ яһалды һәм яңы уҡыу йылына әҙерлек тураһында доклад тыңланды. Ауыр йылдар булыуға ҡарамаҫтан, уҡыусыларҙың өлгәшеүе, 1940—1941 уҡыу йылы менән сағыштырғанда, 2 процентҡа күтәрелгән.

**21 август.** Республика эшсе йәштәренең 1 съезына завод-фабрика һәм башҡа предприятиеларҙа эшләүсе иң алдынғы стахановсылар килде. Предприятиеларҙа 4 меңдән ашыу комсомолец эшләй, уларҙың 75 проценттан күберәге — производство планын 200—300 процентҡа еткереп үтәп килгән стахановсы һәм ударниктар. Тимер юлдарҙа күмер, шыйыҡ яғыулыҡ тейәлгән поездарҙы тотҡарлыҡһыҙ оҙатыуҙа, ауыр йөклө поездарҙы график буйынса ваҡытында уҙғарып ебәреүҙә комсомолецтар ҙур инициатива күрһәтә. Улар бында 250 тонна яғыулыҡҡа экономия яһаны.

Предприятиеларҙа бөтәһе 4325 стахановсы комсомолец, 3066 ударник, 424 комсомол-йәштәр бригадаһы, 299 фронт бригадаһы, 72 цех һәм смена эшләй.

Съезд делегаттары Ленин комсомолының 25 йыллығын лайыҡлы ҡаршылау өсөн бөтә эшсе йәштәргә мөрәжәғәт ҡабул итте.

**22 август.** Фронттағы яҡташтарына республика хеҙмәтсәндәре хат-наказ ебәрҙе. Хатҡа бөтәһе 754 мең 280 кеше ҡул ҡуйҙы.

**30 август.** ВКП(б) Өлкә Ҡомитеты Украина ССР-ы Ворошиловград өлкәһенә ярҙам күрһәтеүҙе ойоштороу тураһында ҡарар ҡабул итте. Партияның ҡала һәм район комитеттарына ярҙам комитеттары төҙөү йөкмәтелде.

**3 сентябрь.** Кушнаренко районы Буденный исемендәге колхоз хеҙмәтсәндәре оккупациянан яфа сиккән райондарға ярҙам ҡулы һуҙыу өсөн Башҡортостандың бөтә колхозсыларына мөрәжәғәт менән сығыш яһаны. Үҙҙәре 25 баш һыйыр, 50 һарыҡ, 25 сусҡа, 5 һабан, 5 тырма, 1 сәскес, 1 иген урғыс машина әҙерләүҙәре тураһында хәбәр итте.

**5 сентябрь.** Тау ҡорамалдары заводында Башҡорт АССР-ның 25 йыллығын уңышлы ҡаршылауға арналған митинг булып үтте. Митингыла күп кенә стахановсылар пландан тыш продукция етештереп, фронтҡа ярҙам итергә һәм БАССР-ҙың 25 йыллыҡ юбилейын лайыҡлы ҡаршыларға йөкләмә алды.

**19 сентябрь.** Ворошиловград өлкәһенә ярҙам итеү өсөн ойошторолған башланғысты республиканың бөтә хеҙмәтсәндәре, предприятие һәм колхоздары хуплап ҡаршы алды. 80 металл эшкәртеү станогы, 57 электромотор, 2 күсмә электр подстанцияһы, пар ҡаҙандары, паровоз, мотовоз бүленде. Предприятиеларҙа 47 мең дана инструмент, 70 мең дана төрлө машинаға запас частар, 170 тонна ҡара металл йыйылды.

Бынан тыш, 60 мең дана кирбес, 80 вагон ағас-төҙөлөш материалдары, 22 вагон алебастр һәм эзбиз, 2,5 тонна буяу һәм олифа, 2 тонна ҡаҙау һәм башҡа кәрәк-яраҡ әҙерләп ҡуйылды.

Республика колхоздары 7 мең баш эре мөгөҙлө мал, 10 мең баш һарыҡ, 3 мең баш сусҡа тупланы.

Өлкә мәктәптәре өсөн уҡыусылар уҡыу әсбаптары, күргәҙмә материалдар, яҙыу кәрәк-яраҡтары йыя башланылар. Бигерәк тә Стәрлетамаҡ ҡалаһы һәм Маҡар районынан Петровск урта мәктәбе һөҙөмтәле эшләй.

**23 сентябрь.** Ҡинйәбулат ауылы эргәһендә (Ишембай районы) 5-се разведка скважинаһынан ҡеүәтле нефть фонтаны урғылды. Уның тәүлек дебиты 200 тоннанан ашыу буласаҡ. Был юғары дебитлы ятҡылыҡты асыу Башҡортостанда нефть сығарыуҙы ҡырҡа арттырырға мөмкинлек бирә.

**26 сентябрь.** ВКП(б) Өлкә Ҡомитеты ҡарары менән республикала 20 сентябрҙән 20 октябргә тиклем фронтовиктар ғаиләләренә ярҙам итеү айлығы иғлан ителде. Өфө төҙөлөш-монтаж тресы комсомолецтары фронтовик балалары — уҡыусылар өҫтөнән шефлыҡ итә. Ишембай ҡалаһында 159 мең 256 һум аҡса, 9133 килограмм аҙыҡ фонды йыйылды. Хәрби хеҙмәткәр ғаиләләренән 1285 кеше эшкә урынлаштырылды, 1793 кубометр утын килтерелде. Ун көн эсендә ҡалала 2293 хәрби хеҙмәткәр ғаиләһенә ярҙам күрһәтелде.

**30 сентябрь.** Ҡоролоҡ йылы уңышын йыйыу өсөн республиканың комсомол ойошмалары ҙур активлыҡ күрһәтте. Ҡолхоздарҙа 4780 комсомол-йәштәр бригадаһы һәм 6548 звено ойошторолдо. Улар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 550 мең гектар ерҙең игенен сапты, 400 мең гектар ерҙең игенен һуҡты. Ҡоролоҡ булыуға ҡарамаҫтан, Башҡортостан дәүләткә 22,5 миллион бот ашлыҡ тапшырҙы.

Башҡорт егеттәре — атлы гвардеец-черниговсыларҙан республика халҡына хат килде. Унда һалдаттарҙың батырлыҡтары тураһында һөйләнелә, 400-ҙән ашыу кешенең ордендар һәм миҙалдар менән наградланыуҙары әйтелә.

**15 октябрь.** Белорет ҡалаһы хеҙмәтсәндәре Ворошиловград өлкәһенә 3 вагон кейем-һалым, 7 вагон ағас, йорт башы ябырға 2 вагон тимер, ярты вагон киң ҡулланыу тауарҙары, 5 мең һумлыҡ төрлө инструменттар, бынан тыш, төрлө йорт кәрәк-яраҡтары оҙатты.

Башнефтекомбинат предприятиелары ла өлкә өсөн бик күп төҙөлөш материалдары, нефть продукттары, ҡорамалдар һәм эре мөгөҙлө мал, кейем-һалым йыйҙы.

**30 октябрь.** Республикала промышленностың яңы тармағы — электр промышленносы барлыҡҡа килде. Ул Ленинградтан, Одессанан һәм Мәскәүҙән эвакуацияланған заводтар нигеҙендә төҙөлдө. Хәҙер был өлкәлә 7 завод булып, улар фронт өсөн электротехник изделиелар етештерә: үткән йылдың ошо ваҡытында 48 мең 541 һумлыҡ тауар бирһәләр, хәҙер ул һан 67 мең 598 һум тәшкил итә.

В.И.Ленин исемендәге Стәрлетамаҡ станоктар эшләү заводы Ленин ордены менән бүләкләнде.

**1 ноябрь.** Бөйөк Октябрь революцияһының XXVI йыллығына бағышлап, республика халҡы Харьков ҡалаһына 65 вагон, Ростовҡа — 7 вагон аҙыҡ-түлек, бүләктәр оҙатты.

**15 ноябрь.** Социалистик ярышты дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә, предприятиеларҙа алдынғы эшселәрҙең һаны арҡандан-арта. Машиналар эшләү заводы Бөтә Союз ярышын башлап ебәреүселәрҙән булды. Ике йыл эсендә ул 14 тапҡыр беренсе урынды яулап, Дәүләт Оборона Ҡомитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы менән бүләкләнде.

**26 ноябрь.** Дим депоһының комсомол-йәштәр бригадаһы биш ай эсендә 985 тонна күмергә экономия яһаны, ә һуңғы бер ай эсендә экономия 300 тонна тәшкил итте.

Инженер-техник работниктарҙың, эшселәрҙең уйлап сығарыу һәм рационализаторлыҡ тәҡдимдәрен тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә, туғыҙ ай эсендә «Ишембайнефть» тресы бер миллион ярым һумға, «Туймазынефть» тресы 218 мең һумға, Ишембай үҙәк электр станцияһы бер ай эсендә 205 тонна мазут һәм газға, 20 мең киловатт-сәғәт электр энергияһына экономия яһаны.

**27 ноябрь.** Туймазы райпромкомбинаты эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре йыллыҡ производство планын 1 декабргә 110 процентҡа үтәү өсөн көрәшә.

**28 ноябрь.** Республикала 889 врач эшләй. Азат ителгән райондарға ярҙамға 350 врач ебәрелде. Медицина работниктарын әҙерләү курстарында 1500 кеше уҡыны, һуғыштың беренсе көнөнән ошо ваҡытҡа тиклем 750 врач әҙерләнде.

**29 ноябрь.** Башҡорт АССР-ның 23 йыллығына арнап, иң яҡшы әҙәби, музыкаль әҫәрҙәргә конкурс иғлан ителде.

**30 ноябрь.** Өфө ҡалаһы комсомолецтары металл һыныҡтары йыйыуҙа һәм уны металлургия заводтарына оҙатыуҙа быйылғы Бөтә Союз ярышында икенсе урынды яуланы.

**19 декабрь.** Башҡортостан халҡы Донбассты аяҡҡа баҫтырыуҙа актив ҡатнашты. Ошо арала ғына Стәрлетамаҡ хеҙмәтсәндәре төҙөлөш материалдары, инструменттар, киң ҡулланыу тауарҙары ебәрҙе. Улицкий етәкселек иткән төҙөлөш коллективы Новославянск сода заводын аяҡҡа баҫтырыуға шефлыҡ итә. В.И.Ленин исемендәге станоктар эшләү заводы эшселәре, эштән һуң ҡалып, 50 станок йыйҙы. Өфө паровоздар ремонтлау заводы йәштәре 4 электромотор, 2 күсерелмә горн, электрослесарҙар өсөн 10 тонна комплект инструмент, балта, көрәк һәм балалар өсөн бүләктәр әҙерләне.

**30 декабрь.** Партияның Ворошиловград өлкә һәм өлкә башҡарма комитетынан ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты, БАССР Верховный Советы Президиумы һәм БАССР Халыҡ Комиссариаттары Советы исеменә рәхмәт хаты килде. Унда Совет хөкүмәте һәм Башҡортостан халҡының туғандарса ярҙамы арҡаһында 175 шахта, кокс химияһы заводы, 51 МТС, больница һәм мәктәптәр аяҡҡа баҫтырылды, тип әйтелә.

## 1944 йыл

**1 ғинуар.** Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры госпиталдәге яралы һалдаттар алдында П.И.Чайковскийҙың «Евгений Онегин» операһын ҡуйҙы. Спектаклдә күренекле артистар Степанов, Зарецкий, Сәлимова, Сәлиғәскәрова һ.б. ҡатнашты.

**2 ғинуар.** Өфө художество музейында А.Э.Тюлькиндың шәхси күргәҙмәһе асылды. Унда рәссамдың 80-дән ашыу әҫәре ҡуйылған.

**5 ғинуар.** Ҡыҙыл Тәре йәмғиәтенең Башҡортостан өлкә комитеты ҙур эш башҡарҙы. Уның ойошмалары һаны 1941 йылда 560-ҡа етеп, 59 мең 500 ағзаһы булһа, быйыл 8 мең 11 ойошмала 118 мең 600 кеше иҫәпләнә. Комитет бөтәһе 4 мең 200 медицина сестраһы әҙерләне. Уларҙың күбеһе фронтта.

**7 ғинуар.** Рәссамдарҙың Өфө ҡала бүлексәһе Башҡорт кавалерия дивизияһына арналған кисә ойошторҙо. Ҡисәлә яҙыусы-журналист Ҡ.Мәргән дивизияның тормошона ҡағылышлы очерктар уҡыны.

**8 ғинуар.** Маҡар урман промышленносы хужалығына 2500 пар саңғы эшләргә йөкләмә бирелгәйне. Декабрь аҙағына ул 2640-ҡа еткерелде. 65 йәштән алып 75 йәшкә тиклем булған эшселәр бер пар урынына көнөнә 3,5—4 пар саңғы етештерҙе. Хоҙайбирҙин, Ғәзизов, Сәйфуллин, Әбделғафаровтар айырыуса һөҙөмтәле эш күрһәтте.

**9 ғинуар.** Республика колхоздары араһында саңғы ярыштары уҙғарырға ҡарар ителде. Ул тәүҙә хужалыҡтарҙа, унан райондарҙа, тик шунан ғына республика масштабында үтергә тейеш.

ВКП(б) Өлкә Комитеты был ярышҡа бик ҙур әһәмиәт биреп, бюро ултырышында махсус ҡарар сығарҙы һәм, партияның район комитеттары колхоздар араһында саңғы ярышы үткәреүҙә бөтә ярҙамды күрһәтергә бурыслы, тип билдәләне.

**10 ғинуар.** Өфө ҡалаһы промкооперация һәм инвалидтар кооперацияһының партия-хужалыҡ активы йыйылышы булып үтте. Был артелдәр үткән йылғы

планды 116,7 процентҡа үтәп, пландан тыш 14 миллион 154 мең һумлыҡ продукция бирҙе.

**11 ғинуар.** Башҡорт опера һәм балет театрына нигеҙ һалыусы дирижер һәм артист П.Славинскийҙың ижади эшмәкәрлегенә 30 йыл тулыу айҡанлы уға БАССР-ҙың халыҡ артисы тигән маҡтаулы исем бирелде.

Республикабыҙ медицина хеҙмәткәрҙәренең тырыш хеҙмәте партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ тарафынан тейешле баһаланды. Профессор Лоҡманов — Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены, Атласов, Ҡотлобаева, Соколов «Почет Билдәһе» ордены менән наградланды, 9 врачҡа — РСФСР-ҙың атҡаҙанған врачы, 20 врачҡа БАССР-ҙың атҡаҙанған врачы исеме бирелде, 93 медицина хеҙмәткәренә «Һаулыҡ һаҡлау отличнигы» значогы, 10 кеше — БАССР Верховный Советы Президиумының Почет грамотаһы, 20 кеше— СССР Һаулыҡ һаҡлау Халыҡ Комиссариатының, 15 кеше БАССР Һаулыҡ һаҡлау Халыҡ Комиссариатының Почет грамотаһы менән бүләкләнде.

**15 ғинуар.** РСФСР Верховный Советы Президиумы Указы менән Мәсетле урта мәктәбе уҡытыусыһы Фәтҡуллинаға, Баймаҡ башланғыс мәктәбе уҡытыусыһы Шәйҙуллинаға РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән исем бирелде.

Артист С.Коган етәкселегендәге фронт бригадаһы хәрәкәт итеүсе армия ҡарамағына китте. Ул унда 2 ай гастролдә буласаҡ.

Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбле теҙелөүенә 5 йыл тулды. Ошо ваҡыт эсендә ул үҫте һәм нығынды. Коллектив яңы программа төҙөп, ауылдарға гастролгә йыйына.

**18 ғинуар.** Республика комсомолецтары һәм йәштәре, пионерҙары һәм мәктәп балалары Сталинград ҡалаһында Салауат Юлаев исемендәге мәктәп төҙөү өсөн 2 миллион 142 мең 684 һум, Донбасс шахтерҙары балаларына 132 мең 984 һум аҡса йыйҙы. Сталинградҡа өҫ һәм аяҡ кейемдәре, уҡыу әсбаптары, Донбасс өсөн 23 мең 138 дана электромотор, станоктар, инструменттар ебәрелде.

ВЛКСМ Өлкә Комитеты Сталинградҡа төҙөлөш эштәренә 680 комсомолец һәм йәштәрҙе оҙатты.

**29 ғинуар.** Ворошиловград өлкәһенең Павлов МТС-ы коллективынан Өфө моторҙар эшләү заводына рәхмәт хаты килде. Завод был МТС-ҡа станоктар эшләп, уны урынлаштырыу өсөн эшселәр ебәргәйне.

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре бында 175 шахта, завод, больница һәм мәктәптәрҙе аяҡҡа баҫтырыуҙа ярҙам итте.

**31 ғинуар.** ВЛКСМ Өлкә Комитеты Донбасс күмер предприятиеларының заказдарын үтәү буйынса комсомол ойошмалары араһында барған социалистик ярышҡа йомғаҡ яһаны, Еңеүселәр Почет грамоталары менән бүләкләнде. Өфө ҡалаһының Ленин һәм Молотов районлары, паровоздар ремонтлау заводы, 1-се һанлы тимер юл училищеһы, 3-сө һанлы төҙөлөш-монтаж тресы, Әлшәй, Өфө һәм Туймазы районлары, Ишембай, Стәрлетамаҡ ҡалалары комсомол ойошмаларының яҡшы эше билдәләп үтелде.

**5 февраль.** Республика үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәренең конкурс-смотры башланғайны. Уның 1-се туры тамамланып, 2093 коллектив колхоз, совхоз, предприятие һәм уҡыу йорттарында сығыш яһаны.

**7 февраль.** Ете ай эсендә Башҡорт академия драма театры 170 ауылда булып, 340 спектакль күрһәтте. Филармония бер ай эсендә 274 концерт бирҙе. 12 фронт бригадаһы төҙөлөп, улар 400 концерт һәм спектакль ҡуйҙы. Госпиталдәрҙәге ауыр яралылар өсөн иң яҡшы йырсыларҙан айырым квартет ойошторолдо.

**13 февраль.** Өфө ҡала партия комитетының VI конференцияһы булып үтте. Унда промышленность, транспорт, элемтә предприятиеларының һуғыш йылдарындағы эшенә йомғаҡ яһалды. 1940 йылда ҡалала бөтәһе 79 предприятие булһа, хәҙер ул 122-гә етте.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Өфө ҡалаһы эвакуацияланған 36 предприятиены ҡабул итте.

Бөтә промышленность предприятиеларының тулайым эшләп сығарыуы 1940 йылда 100 процент булһа, 1941 йылда — 214 процент, 1942 йылда — 370 процент, ә 1943 йылда 440 процент тәшкил итте. Бындай үҫеш эске резервтарҙы дөрөҫ ҡулланыу һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү иҫәбенә мөмкин булды.

Был көндә өс завод Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағын үҙҙәрендә тота, бер предприятие үҙ наркоматының һәм ВЦСПС-тың күсмә Ҡыҙыл байрағын, ә 8 предприятие Бөтә Союз социалистик ярышында икенсе һәм өсөнсө урындарҙы яуланы.

Өфө моторҙар эшләү заводы коллективы 1943 йылдың икенсе яртыһынан бирле ай һайын беренсе урынды алып, Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағын үҙ ҡулынан ебәрмәй, а нефть эшкәртеү заводы ошо ваҡыт эсендә СССР нефть промышленносы предприятиелары араһында беренсе урынды яуланы.

«Өфөнефтезаводстрой» тресы ла Бөтә Союз социалистик ярышында Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағына лайыҡ булды.

**14 февраль.** Һуғыштың тәүге көнөнән алып бөгөнгө көнгә ҡәҙәр 5 юғары уҡыу йорто 1589 юғары квалификациялы кадр әҙерләне. Әле юғары уҡыу йорттарында — 4988, техникумдарҙа һәм училищеларҙа 2415 кеше белем ала.

Өфө ҡалаһы һөнәрселек училищеларында һәм ФЗО мәктәптәрендә 10 мең 291 эшсе әҙерләнеп, уларҙың 8 меңе ҡаланың завод-фабрика һәм башҡа предприятиеларында эшләй.

Бынан тыш, ике йыл эсендә хеҙмәттән айырылмай 44 мең эшсе (шуларҙың 2,5 меңе слесарь, 5 меңе токарь, 2 меңе төҙөлөш эшселәре, 600 шофер һ.б.) уҡыны.

**19 февраль.** Фронтовик балаларына бүләктәр йыйыу дауам итте. Саҡмағош районы комсомолецтары 40 мең һум аҡса, өҫ һәм аяҡ кейемдәре, һауыт-һабалар йыйҙы. Күп райондарҙа ярҙам фондтары ойошторолдо. Белорет районы комсомолецтары йәкшәмбе өмәһендә эшләнгән аҡсаны ошо фондҡа тапшырҙы.

**22 февраль.** Ҡандра районы хеҙмәтсәндәре республика госпиталдәрендә дауаланған яралы һалдаттар файҙаһына бүләктәр йыйыуҙы ойошторҙо.

«Иштуғай» колхозы инициативаһы менән Ҡандра районында асылған 5 балалар йортонда 125 фронтовик балаһы тәрбиәләнә.

**23 февраль.** Яралы һалдаттарҙы яҡшы хеҙмәтләндергәне өсөн Урал хәрби округы командованиеһы Башҡортостан культура хеҙмәткәрҙәренең бер төркөмөн Почет грамоталары менән бүләкләне. Улар араһында БАССР-ҙың сәнғәт эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы Д.Т.Емасов, уның урынбаҫары К.И.Рушев, сәнғәт эшсәндәренең өлкә профсоюз председателе К.А.Власова, Өфө рус драма театры директоры Б.С.Брон, БАССР-ҙың халыҡ артистары П.И.Славинский, Б.Ә.Йосопова, Өфө ҡурсаҡ театрының художество етәксеһе М.И.Елгаштина, БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Ғ.С.Саттаров, У.Я.Калинина, А.П.Атаманов һ.б. бар.

**25 февраль.** Өфөнөң урындағы промышленность стахановсылары ошо көндә эшләгән эш хаҡын фронтовик балаларына ярҙам фондына индерҙе.

Өфөнөң 1-се, 3-сө, 11-се, 18-се, 38-се мәктәптәрендә МОПР ойошмаларының бөтә взносы етем балаларға бирелде.

**14 март.** «Юғары уңыш үҫтереү өсөн комсомол-йәштәр звенолары ойоштороу» тураһында ВКП(б) Өлкә Комитетының һәм БАССР Совнаркомының ҡарары сыҡты.

**16—19 март.** Өфөлә Башҡорт АССР-ның 25 йыллығына арналған художество үҙешмәкәр түңәрәктәрендә ҡатнашыусылар смотрының етенсе туры башланды. Унда бөтәһе 2197 коллектив килде. Беренсе урынды Белорет районы Әүжән промколхозының халыҡ хоры, Өфө Ҡыҙыл Армия йорто бейеү һәм йыр ансамбле, Стәрлетамаҡтың 4-се һанлы һөнәрселек училищеһы хоры, Өфөләге

«Ударник» клубы халыҡ инструменттары оркестры, ошо клубтың рус һәм башҡорт халыҡ бейеү, Өфө 9-сы һанлы һөнәрселек училищеһы бейеү, Белорет ҡалаһынан Г.Новоселова етәкселегендәге акробаттар коллективы алды.

Яңғыҙ башҡарыусыларҙан 1-се бүләктәр башҡорт халыҡ бейеүен башҡарған Байтурина һәм Сөләймәнова (Әбйәлил районы), Ш.Насиров (Өфө ҡалаһы), вокалист Липецкая (Өфө), үҙенең шиғырҙарын уҡыусы Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды Погост (Өфө) иптәштәргә бирелде. 56 башҡарыусының эше Почет грамотаһы менән билдәләнде. Райондар араһында беренсе урынды Әбйәлил районы, икенсе урынды Белорет районы яуланы.

**19 март.** Башҡорт АССР-ның 25 йыллыҡ юбилейына арнап, радиокомитет митинг ойошторҙо. Митингыла сәнғәт эштәре буйынса идаралыҡ начальнигы Д.Емасов, һаулыҡ һаҡлау наркомы профессор Лоҡманов, пионерка Эдварда Блок һәм шағир Р.Ниғмәти һ.б. сығыш яһаны.

**20 март.** Башҡорт АССР-ның 25 йыллығы исемендәге эскадрилья төҙөү өсөн 80 миллион һум аҡса йыйып тапшырыу айҡанлы республика хеҙмәтсәндәре исеменә Дәүләт Оборона Комитетынан рәхмәт телеграммаһы килде.

**21 март.** Өфөнөң 1-се һанлы клиник больницаһында БАССР-ҙың 25 йыллыҡ юбилейына арналған фәнни-практик конференция асылды. Конференцияла профессорҙар, врачтар сығыш яһаны.

**22 март.** Юбилей хөрмәтенә Башҡорт академия драма театрында Ҡ.Даяндың «Таңсулпан», И.Кедров һәм К.Мәргәндең «Яу», Б.Бикбайҙың «Салауат», Рус драма театрында Ф.Гладковтың «Ҡүптәнән бирле», М.Горькийҙың «Егор Булычев», Н.Гоголдең «Бүреләр һәм һарыҡтар», Өфө ҡурсаҡ театрында «Дала королеваһы» спектаклдәре, опера һәм балет театрында Х.Заимов һәм А.Спадавеккианың «Аҡбуҙат» операһы күрһәтелде. Спектаклдәрҙә, опера һәм балеттарҙа Сафиуллин, Насретдинова, Бәхтийәрова, Юлтыеваларҙан тыш, Киров исемендәге Ленин орденлы Ленинград опера һәм балет театры артистары Анисимова, Ширипина, Писаревтар ҡатнаша.

**24 март.** Украина ССР-ы Фәндәр академияһы президенты академик А.А.Богомолец һәм яҙыусы Павло Тычина Башҡортостандың 25 йыллыҡ юбилейы уңайы менән ҡотлау телеграммаһы ебәрҙеләр. Унда, эвакуация йылдарында башҡорт халҡының күрһәткән ҡунаҡсыллығы бер ваҡытта ла онотолмаҫ, тип әйтелә. Ысынлап та, ике халыҡтың дуҫлығы был йылдарҙа ифрат нығынды. Өфөлә «Украина тарихы», «Украин әҙәбиәтенең тарихы», «Украин-рус һүҙлеге», украин совет яҙыусыларының әҫәрҙәре нәшер ителде. «Былар өсөн беҙ башҡорт халҡына ҙур рәхмәт белдерәбеҙ»,— тиелә телеграммала.

**25 март.** Республикала промышленность продукцияһының күләме, 1943 йыл менән сағыштырғанда, 39 тапҡырға, машиналар эшләү промышленносының продукция күләме, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 31,5 тапҡырға үҫте. Суйын иретеү 68,5 процентҡа, ҡорос — 46,4, прокат эшләп сығарыу 29 процентҡа артты. Ағас эшкәртеү заводтары, 1940 йыл менән сағыштырғанда, 3 тапҡырға күберәк продукция бирҙе, электр энергияһы эшләп сығарыу ҙа шул уҡ миҡдарҙа артты.

**26 март.** Башнаркомздрав Йоматау, Янғантау, Красноусольск курорттарын Ватан һуғышы инвалидтары өсөн эшләтә башланы.

**28 март.** Стәрлетамаҡ районы «Рассвет» колхозы председателе Н.Мирасов бер самолет һатып алып, фронтҡа тапшырҙы.

**30 март.** Өфө ҡалаһының «Металлист» промартеле эмалле тимер һауыт-һабалар эшләй башланы. Цех йылына 150 мең дана төрлө продукция етештерәсәк.

Өфө төҙөлөш материалдары ғилми-тикшеренеү институты ситтән килтерелә торған ҡиммәтле төҙөлөш материалдары урынына урындағы материалдарҙы файҙаланыуҙы юлға һалыуҙы үҙенең төп бурысы итеп ҡуйҙы. Уның эксперимен-

таль-производство мастерскойы утҡа һам кислоталарға бирешмәй торған күп төрлө керамика изделиелары эшләүҙе үҙләштерҙе. Хәҙерге көндә мастерской балсыҡтан муфель һәм ҡыҙҙырыу мейестәре өсөн плиталар, электр менән йылытылыусы приборҙар, металл анализы өсөн ҡулланыла торған һауыттар, һәр төрлө изоляторҙар һ.б. нәмәләр етештерә.

**9 апрель.** Башҡортостан ауыл хужалығы институтында ботаника, зоология, физиология, малсылыҡ кафедраларында һуғыш ваҡытында ябылған аспирантуралар яңынан эшләй башланы.

Башҡорт дәүләт медицина институтында юбилейға арналған ғилми конференция асылды. Конференцияла докладтар менән профессорҙар Пандиков, Шерстенников, Полянцев, Савченко, Лерман, Мельников һ.б. сығыш яһаны. Докладтарҙа халыҡ хужалығы өлкәһендә практик әһәмиәте булған 500-ҙән ашыу фәнни асыш теркәлгәне билдәләнде.

Серго Орджоникидзе исемендәге авиация институты Өфөгә күсеп килгәс, ике сығарылыш булды. Тиҙҙән юғары квалификациялы инженер-белгестәрҙең өсөнсө отряды (27 кеше) хеҙмәт юлына аяҡ баҫасаҡ.

**12 апрель.** Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбле Стәрлетамаҡ, Ишембай, Ҡуйбышев, Горький ҡалаларына гастролгә сығып китте.

**14 апрель.** Башҡорт дәүләт филармонияһының 7 бригадаһы яҙғы сәсеү осоронда 200-ҙән ашыу концерт күрһәтәсәк.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Указы менән Сәйет Исмәғилев, Фәррәх Дәүләтшин һам Мөхәммәтша Буранғоловҡа БАССР-ҙың халыҡ сәсәне тигән маҡтаулы исем бирелде.

**21 апрель.** Башҡорт дәүләт филармонияһы ҡаршыһында 40 кешенән торған ҡатын-ҡыҙҙар хоры асылды.

**23 апрель.** Башҡорт опера һәм балет театрында балет кисәһе булып үтте. Унда Ленинград хореография училищеһын һәм Башҡорт театр училищеһын тамамлаған йәштәр ҡатнашты.

Башҡорт дәүләт филармонияһы үҙенең сезонына йомғаҡ яһаны. Ҡышҡы сезонда концерт һаны, үткән ҡыш менән сағыштырғанда, күпкә артты. Йәш башҡарыусылар эстрадаһы бөтәһе 127 концерт ҡуйҙы, бейеү ансамбле ошо сезон эсендә генә лә 20-нән ашыу яңы бейеү әҙерләп, башҡорт хореографик сәнғәтен үҫтереүгә ҙур өлөш индерҙе.

**28 апрель.** Өфөлә һынлы сәнғәт күргәҙмәһе асылып, унда 43 рәссам ҡатнашты. Иң яҡшы әҫәрҙәр Мәскәүгә ебәреләсәк.

**19 май.** Өфө ҡалаһында балалар кинотеатры эшләй башланы. Уға Советтар Союзы Геройы Александр Матросов исеме бирелде.

**21 май.** Республикала күренекле совет йырсыһы Генрих Циммермандың һәм Свердловск филармонияһының гастролдәре башланды.

Өфөләге 1-се һанлы госпиталдә медицина сестраларының республика конференцияһы эшләй башланы.

Ҡыҙыл Армия йортонда культура һәм сәнғәт буйынса лекторий асылды.

**1 июнь.** Республика театрҙарының йәйге сезоны асылды. БАССР Совнаркомының сәнғәт эштәре буйынса идаралығы планына ярашлы рәүештә, Рус драма, опера һәм балет театрҙары Луначарский исемендәге баҡсала 15-әр көн сығыш яһаны.

Рус драма театры Стәрлетамаҡ, Ишембай, Бөрө ҡалаларында спектаклдәр ҡуясаҡ.

Башҡорт драма театрының ике группаһы республиканың төрлө районларына гастролгә китте, ә Өфөлә Стәрлетамаҡ оперетта театры гастролдәре башланды.

**3 июнь.** ФЗО мәктәптәре делегацияһы Белоруссияның һөнәрселек училищелары һәм ФЗО мәктәптәре өсөн өс вагон ҡорамал алып китте.

**4 июнь.** Ҡурсаҡ театры фронттың алғы һыҙығына гастролгә сыҡты. Яҙыусылар союзы ҡаршыһында А.П.Чехов көндәрен үткәреү буйынса комиссия төҙөлдө. Председателе итеп яҙыусы Сәғит Агиш билдәләнде.

**5 июнь.** Иглин районында республикала беренсе булып санаторий тибындағы мәктәп асылды.

Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбле Ҡазан ҡалаһына китте. Программала — 18 башҡорт халыҡ бейеүе.

**7 июнь.** Һөнәрселек училищеларында һәм ФЗО мәктәптәрендә 45 мең 630 йәш эшсе белем алды. Улар, республика промышленность предприятиеларынан тыш, Донбасс, Сталинград, Ростов, Полтава ҡалаларындағы промышленносты аяҡҡа баҫтырыуҙа ла ҡатнашалар.

**8 июнь.** Өфө районы «Париж коммунаһы» исемендәге колхоз ағзалары һәр йортта хужалыҡ өсөн 6—10 себеш үҫтереп бирергә, һәр тауыҡ иҫәбенә 20 килограмм кесерткән, 2 килограмм минераль аҙыҡ әҙерләргә һәм ҡошсолоҡто колхоздың юғары доход биреүсе тармағына әйләндерергә, тигән яҡшы башланғысҡа нигеҙ һалды.

Миәкә районы хеҙмәтсәндәре немец илбаҫарҙарынан азат ителгән райондарға 1350 баш мал ебәрҙе.

**11 июнь.** Башҡортостан ауыл хужалығы институтында быға тиклем ике факультет (агрономия һәм зоотехния) булһа, оҙаҡламай өсөнсөһө — ветеринария факультеты эшләй башлаясаҡ.

**17 июль.** Башҡортостан илебеҙҙең немец-фашист илбаҫарҙарынан азат ителгән райондарына 15 мең эре мөгөҙлө мал һәм 22 мең баш һарыҡ йыйып оҙатырға йөкләмә алғайны. Йөкләмә күпкә арттырып үтәлде.

**18 июль.** Республикала 1943—1944 уҡыу йылында 4851 мәктәп эшләне. Ошо уҡыу йылында ғына ла 130 мең уҡыусыға мәктәптәрҙә туҡланыу, 6 мең комплект ҡышҡы кейем, 24 мең күлдәк һәм костюмдар, 15 мең пар аяҡ кейеме, 5 мең пар быйма бүленде. Күп райондарҙа балаларға туҡланыу, уҡыусыларҙың өйөнә йөрөп дәрес биреүҙәр ойошторолдо.

**3 август.** Өфө эпидемиология һәм микробиология институты (институт 1941 йылда Мәскәү өлкәһенән күсереп килтерелгәйне) үткән йыл 9 миллион 945 мең һумлыҡ препарат эшләп сығарһа, быйыл ете айҙа 5 миллион 520 мең һумлыҡ етештерҙе. Элек сит өлкәләрҙән индерелгән күп кенә препараттар хәҙер республиканың үҙендә етештерелә.

Дарыу үләндәре йыйыу ҙа артты. Мәҫәлән, үткән йәй 107 тонна үлән йыйылды. Улар илебеҙҙең башҡа өлкәләренә лә ебәрелде.

**5 август.** Республиканың 42 госпиталендә 174,3 мең яралы һалдат дауаланып, уларҙың 73 проценты яңынан Ҡыҙыл Армия сафына баҫты.

**10 август.** БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы «Фронтовик балалары өсөн ауылдарҙа пионер лагерҙары ойошторорға һәм балаларға ярҙам фонды асырға» ҡарар сығарҙы. Ошо нигеҙҙә быйыл йәй генә лә 26 мең бала пионер лагерҙарында ял итә.

**11 август.** Өфө моторҙар эшләү заводында ошо йылда ғына 1325 рационализаторлыҡ тәҡдиме индерелде, хеҙмәт етештереүсәнлеге, үткән йыл менән сағыштырғанда, 3,1 тапҡырға артты. Моторҙар эшләү заданиеһын уңышлы үтәгәне өсөн завод Ленин һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән бүләкләнде.

**12 август.** Көйөргәҙе районы «Золотой колос» колхозының атаҡлы колхозсыһы А.Чуева 11 август көнө 5200 көлтә бәйләп, көндәлек нормаһын 1150 процентҡа үтәне.

**13 август.** Өфө художество музейында бөйөк рус рәссамы И.Е.Репиндың әҫәрҙәренән күргәҙмә асылды.

**17 август.** Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләләренә ярҙам өсөн 5 мең гектар ерҙә тары, бойҙай, арыш һәм картуф үҫтерелде.

**18 август.** Мәктәп уҡыусылары 7401 гектар ерҙә иген һәм башҡа техник культуралар үҫтерҙе. Улар ата-әсәләре менән бергә 3692 мәктәп ремонтланы, 265 мең кубометр утын әҙерләне, 62 мең 200 парта, 1 мең 200 өҫтәл, 12 мең 950 ултырғыс, 6 мең 75 класс таҡтаһы һәм хәрби ҡорамалдарҙы рәткә килтерҙе.

**22 август.** Республика комсомолецтары һәм йәштәре, Иваново өлкәһенең Шуйский районы комсомолецтары башланғысына ҡушылып, мал аҙығы әҙерләү айлығы иғлан итте. Бишбүләк районында 63 йәштәр бригадаһы 9210 тонна силос, 184 тонна япраҡ һәм 213 тонна кесерткән әҙерләне. Айлыҡта республиканың бөтә райондары ла ҡатнашты.

**24 август.** Архангель районының йәш малсылары һөнәргә иң яҡшы эйә булыу өсөн социалистик ярыш ойоштորҙо. Был яңылыҡты республика йәштәре күтәреп алды һәм һәр колхозда, совхозда «Иң яҡшы һауынсы», «Иң яҡшы малсы», «Иң яҡшы умартасы» тигән маҡтаулы исем өсөн ярыш йәйелдерелде.

**25 сентябрь.** Башҡорт дәүләт филармонияһы 1944—1945 йылғы ҡышҡы сезонын П.И.Чайковскийҙың әҫәрҙәренән төҙөлгән симфоник концерт программаһы менән башлап ебәрҙе. Программала «Алтынсы симфония», «Ромео һәм Джульетта» операһына увертюра, «Щелкунчик» балетынан вальс һ.б. әҫәрҙәрҙән өҙөктәр бар.

**26 сентябрь.** Ошо көндө Туймазы нефть промыслаларында А.Т.Трипольский бригадаһы быраулаған 100-сө скважина ҡеүәтле нефть фонтаны атты. Уның тәүлек ҡеүәте — 250 тонна.

**27 сентябрь.** Бер төркөм сәнғәт эшмәкәрҙәренә һәм «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы редакцияһы работниктарына БАССР Верховный Советы Президиумының Почет грамоталары тапшырылды. Улар араһында артистар Ғ.Туҡаев, М.Хәбибуллин, Ғ.Шамуҡов, редакциянан И.Архипов, М.Вәлиева, Ғ.Ғафаров, И.Ниғмәтуллин һ.б. иптәштәр бар.

**6 октябрь.** Республиканың балалар баҡсалары хеҙмәткәрҙәре үҙ иҫәптәренә Севастополь ҡалаһындағы 100 урынлыҡ балалар баҡсаһын йыһазландырырға ҡарар итте. Улар өҫтәл, ултырғыс, һауыт-һаба, кейем-һалым һәм башҡа кәрәк-яраҡтар йыйҙы, пианино һатып алыу өсөн 12 мең һум аҡса әҙерләне.

**11 октябрь.** Башҡорт опера һәм балет театры композитор Ҡаправниктың «Дубровский» операһын сәхнәгә ҡуйҙы.

**18 октябрь.** Башҡортостан Хеҙмәт резервтары идаралығы үҙешмәкәр сәнғәт бригадаһы Мәскәүгә — Бөтә Союз олимпиадаһына китте. Унда һөнәрселек училищеларының һәм ФЗО мәктәптәренең үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәрендә ҡатнашыусыларҙың иң һәләтле бейеүселәре, йырсылары бар.

**22 октябрь.** Республика лекторийы көҙгө-ҡышҡы сезонын «Рус халыҡ йыры» темаһына арналған лекция-концерт менән башлап ебәрҙе.

**24 октябрь.** Өфөлә ауыл врачтарының республика съезы асылды. Уға 400 делегат килде.

**28 октябрь.** Белорет ҡалаһында яңы культура һарайы асылды.

**10 ноябрь.** Өфөлә музыкаль комедия театры асылды.

**19 ноябрь.** БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре рәссам И.И.Урядов «Чапаев дивизияһының Ағиҙелде аша сығыуы» исемле яңы картинаһын яҙып бөтөрөп, художество музейына күргәҙмәгә ҡуйҙы.

**27 ноябрь.** Республика машиналар эшләү заводтарында академик Е.О.Патондың ҙур тиҙлектә автоматик йәбештереү ысулын индереп, промышленность предприятиелары һөҙөмтәле эшләне. Моторҙар, шыйыҡ яғыулыҡ, һуғыш кәрәк-яраҡтары етештереү үҫкәндән-үҫте.

**1 декабрь.** Ҡала һәм райондарҙа художестволы үҙешмәкәр түңәрәктәренең смотры башланды. Иң яҡшы коллектив йәки башҡарыусылар республика смотрына һайлап алынасаҡ. Унда еңеүселәр Бөтә Союз смотрына Мәскәүгә барасаҡтар.

**3 декабрь.** Артистар М.Хәбибуллин, Ғ.Шамуҡов, Латипов һәм Бенифанд етәкселек иткән концерт бригадалары фронттың алғы һыҙығында концерттар менән сығыш яһаны.

Тик бер Хәбибуллин бригадаһы ғына 112 концерт ҡуйҙы. 1944 йылда бөтә концерт бригадалары фронтта 216 концерт бирҙе.

**5—6 декабрь.** Өфөлә халыҡ судьяларының республика кәңәшмәһе булып үтте. Кәңәшмәлә Башҡортостандың юстиция халыҡ комиссары Авзанов «Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 27 йыллығы айҡанлы Башҡортостан суд органдарының һәм юстиция хеҙмәткәрҙәренең бурыстары» тигән темаға доклад яһаны.

**7 декабрь.** Республикала өс колхоз-совхоз театры, театр училищеһы, балалар музыка мәктәбе асылды.

Башҡорт академия драма театрының был осорҙа 18 премьераһы булды. Шуларҙың 14-е милли драматургиянан. Опера һәм балет театры 16 опера ҡуйҙы, шуның 6-һы — милли. Беренсе тапҡыр «Чио-чио-сан», «Иван Сусанин», «Аида» һәм башҡа опералар башҡорт сәхнәһендә күрһәтелде.

Өфө Рус драма театры 38 спектакль ҡуйҙы. Театр репертуарында ҙур урынды патриотик һәм Ватан һуғышы темалары алып тора.

Башҡорт дәүләт филармонияһы бөтәһе 10 мең концерт бирҙе.

Башҡорт эстрадаһы жанрына нигеҙ һалынды: 4 милли эстрада бригадаһы төҙөлдө.

**14 декабрь.** СССР Верховный Советы Президиумы Указы менән Башҡортостандың бер төркөм уҡытыусылары ордендар һәм миҙалдар менән наградланды. Ленин ордены менән 6 кеше, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән 40 кеше, «Почет Билдәһе» ордены менән 25 кеше, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» миҙалы менән 39 кеше бүләкләнде.

**27 декабрь.** Өфө комсомолецтары һәм йәштәре 1944 йылда 1 мең рационализаторлыҡ тәҡдиме индереп, 4,5 миллион һум экономия яһаны. 13 мең йәш эшсе яңы һөнәргә эйә булды. Ҡала предприятиеларында 1900 комсомол-йәштәр бригадаһы эшләй. Уларҙың һаны, 1943 йыл менән сағыштырғанда, 3 тапҡырға артты. 631 бригада фронт бригадаһы исемен яуланы.

Нефть эшкәртеү заводының йәштәр бригадалары ошо йылда Ҡыҙыл Армия фондына пландан тыш 9 мең тонна бензин бирҙе.

Ҡайһы бер бригадаларҙың уңышы бөтә илгә билдәле. Н. заводының Ямалетдинов бригадаһы илдә беренсе урынды алып, ВЛКСМ Үҙәк Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағын яуланы.

Өфө паровоздар ремонтлау заводында 16 йәшлек Б.Бронников эш нормаһын 250—300 процентҡа үтәй. Йәш патриоттар Бөйөк Октябрь байрамын лайыҡлы ҡаршылау өсөн яңы йөкләмәләр алды.

## 1945 йыл

**1 ғинуар.** Республикабыҙҙың Урал аръяғы райондарын хеҙмәтләндереү өсөн Учалыла башҡорт колхоз-совхоз театры асылды. БАССР Халыҡ Комиссариаты ҡаршыһындағы сәнғәт эштәре буйынса идаралыҡ костюмдар, әҙәбиәт һәм башҡа кәрәк-яраҡтар алыуға һәм буласаҡ театр бинаһын ремонтлауға 122 мең һум аҡса бүлде.

**5 ғинуар.** Рәссамдар Ежов З.Космодемьянскаяға арналған панноһын, А.Герасимов «Матросов һуғышта», «Башҡорт умарталығы», Н.Абрамова «Со-

веттар Союзы Геройы Рыбалко» исемле картиналарын яҙып бөтөп, художество музейына ҡуйҙы.

**12 ғинуар.** «Красная Башкирия» газетаһы редакцияһы ҡаршыһында башлап яҙыусылар өсөн әҙәби түңәрәк төҙөлдө, тәүге дәрестәрҙең береһендә йәш яҙыусылар Трубицын, Орлов, Башҡорт дәүләт педагогия институты студенттары яңы шиғырҙарын уҡыны.

**18 ғинуар.** Украина ССР-ы ғалимдары «Башҡортостан үҫемлектәре» тигән белешмә баҫтырып, Башҡортостанға бүләк итеп тапшырҙы. Унда республиканың 1500 төрлө үҫемлек өлгөләре индерелгән.

**21 ғинуар.** Н.К.Крупская исемендәге республика китапханаһында бөйөк юлбашсыбыҙ В.И.Лениндың тормошо һәм эшмәкәрлегенә арналған ҙур китап күргәҙмәһе асылды.

**28 ғинуар.** Башҡорт дәүләт филармонияһы саҡырыуы буйынса Өфөгә РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Игорь Ильинский һәм яҙыусы Лев Кассиль килде. Улар ҡала хеҙмәтсәндәре алдында сығыш яһаясаҡ.

**29 ғинуар.** Белорет металлургия заводы, 1940 йыл менән сағыштырғанда, тулайым продукция етештереүҙе 71,8 процентҡа үҫтерҙе һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә продукцияның яңы төрөн — ҡорос һәм прокаттың юғары сифатлы маркаһын үҙләштерҙе. Заводтың домна, мартен һәм прокат цехтары бер нисә тапҡыр металлургтарҙың Бөтә Союз ярышында беренсе, икенсе һәм өсөнсө урындарҙы яуланылар. Ҡалала агитмасса эше лә киң ҡолас алды. Унда 482 агитатор, 68 агитколлектив иҫәпләнә. Улар араһында 285 ВКП(б) ағзаһы, 86 ВКП(б) ағзалығына кандидат, 21 комсомолец бар.

**3 февраль.** Рус драма театры үҙенең ҡышҡы сезонын Тур һәм Шейниндың «Алыш» тигән спектакле менән башлап ебәрҙе.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Указы менән халыҡ бейеүҙәрен пропагандалау өлкәһендәге уңыштары өсөн артистар И.Ибраһимов, М.Иҙрисов, Х.Мағазоваларға Башҡортостандың атҡаҙанған артисы тигән маҡтаулы исем бирелде.

**11 февраль.** Өфөлә Башҡортостан архитекторҙарының күргәҙмәһе асылды. Ундағы экспонаттар бөтәһе лә Мәскәүҙә күрһәтелеп, юғары баһа алғайны.

**23 февраль — 4 март.** Республикала Совет Армияһының 27 йыллығына арналған кинофестиваль үткәрелде. Унда Бөйөк Ватан һуғышы тураһындағы фильмдар күрһәтелде.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Указы менән театр сәнғәте өлкәһендәге ҙур уңыштары өсөн В.Пантелеевҡа Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, артистар Р.Сыртланов, Ғ.Туҡаев, М.Хәбибуллин, Х.Мансуроваларға Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған артисы тигән маҡтаулы исемдәр бирелде.

**12 март.** Малсылыҡты һәм уның продуктлылығын үҫтереү буйынса Бөтә Союз социалистик ярышына йомғаҡ яһағандан һуң, Учалы районының «Октябрь», Федоровка районының «Оҫкон», Баймаҡ районының Карл Маркс исемендәге, Архангель районының «Путь к социализму», Бөрйән районының «Яңы юл» колхоздары еңеүселәр тип табылды.

**11—15 март.** Башҡорт дәүләт педагогия институты үҙенең 25 йыллығын билдәләп үтте. Шул уңай менән ойошторолған ғилми конференцияла 17 доклад тыңланды.

**13 март.** Яҙғы сәсеү ваҡытында ялан батырҙарын хеҙмәтләндереү өсөн Башҡорт дәүләт филармонияһы 7 колхоз-совхоз концерт бригадаһы төҙөнө. Улар республиканың 30 районында буласаҡ.

**14 март.** Башҡорт академия драма, опера һәм балет театрҙары РСФСР милли театрҙары смотрында «Таңсулпан», «Аҡбуҙат», «Ҡарлуғас» спектаклдәре, «Сыңрау торна» балеты, «Евгений Онегин» операһы менән сығыш яһаны. Башҡортостан сәнғәт эшмәкәрҙәренең профессиональ оҫталығы комиссия тарафынан юғары баһа алды.

**16 март.** Өфөлә үҙешмәкәр коллективтарҙың икенсе республика смотры башланды. Смотрҙың беренсе көнөндә 200 башҡарыусы ҡатнашһа, икенсе көндә уларҙың һаны 596-ға етте.

**17 март.** 1943 йыл менән сағыштырғанда, үткән йылда республикала нефть 7 процентҡа күберәк сығарылды. Бөтә промыслалар ҙа дәүләт планын арттырып үтәне.

Быраулау эшендә «Туймазынефть» тресы яҡшы уңыштарға өлгәште. Девон нефтен эҙләгәндә беҙҙең геологтар академик И.М.Губкин күрһәтмәләренә таянып эшләне. Хәҙерге көндә 4 юғары дебитлы девон скважинаһы эшләй. Үткән йылдың октябренән алып нефть сығарыу 300 процентҡа үҫте. Нефть эшкәртеүселәрҙең дә эшен күрһәтеп үтергә кәрәк. Нефттән продукттар алыуҙы улар 102,8 процентҡа үтәп, 1943 йыл менән сағыштырғанда, 21,1 процент өҫтәмә продукт бирҙе. Иптәш Рябчиков директор булған завод бер йыл буйына Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағын үҙендә тотто.

**21 март.** Өфө ҡалаһы марксизм-ленинизм университеты ҡаршыһында сәнғәт һәм әҙәбиәт хеҙмәткәрҙәре өсөн бүлек асылды. Программаға ВКП(б) тарихын, СССР тарихын, рус халҡының культураһын, башҡорт халҡының тарихын һәм культураһын өйрәнеү индерелгән. Унда бөтәһе 100 кеше уҡый.

**24 март.** Республика колхоздарында һәм совхоздарында 2760 комсомол-йәштәр звеноһы ойошторолдо. 2150 звено ҡыҫҡа ваҡытлы семинар-курстарҙа уҡыу үтте.

**25 март.** ВКП(б) Өлкә Комитеты партия Үҙәк Комитетының «Башҡортостан партия ойошмаһында агитация-пропаганда эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары» (27 ғинуар, 1945 йыл) тигән ҡарарын тормошҡа ашырыу маҡсатында район, ҡала партия комитеттарының пропаганда һәм агитация бүлектәре мөдирҙәренең һәм район, ҡала газеталары редакторҙарының семинарын үткәрҙе. Райондарҙа агитаторҙарҙың өс көнлөк курс-семинарҙары булып үтте. Партия, совет, комсомол активистарын уҡытыу өсөн ике йыллыҡ киске партия мәктәптәре асылды. Партияның Өлкә Комитеты «Агитатор блокнотын» өҙлөкһөҙ баҫып сығарыуҙы ойошторҙо.

**31 март.** Башҡортостан медицина институтында сираттағы ғилми конференция эшләй башланы. Теоретик һәм клиник медицина проблемаларына ҡағылышлы 20-нән ашыу доклад тыңланды. Унда профессорҙар Михайловский, Мельников, Смирнова, Полянцев, Губорез, Спасский һ.б. сығыш яһаны.

**15 апрель.** Һуғыш дәүерендә ил һәм фронтҡа бензин эшләп сығарыу планын уңышлы үтәп килгәне өсөн Өфө нефть эшкәртеү заводы Ленин ордены менән бүләкләнде.

**25 апрель.** Өфөлә В.И.Ленин музейына бронзанан мемориаль таҡта ҡуйылды.

Башҡорт опера һәм балет театры П.И.Чайковскийҙың «Пиковая дама» операһын башҡорт телендә ҡуйҙы.